*✓Барыһы ла сүп үләндәренең баҡсаны сүпләүен һәм баҫыуҙарҙың уңдырышлылығын кәметеүен белә. Баҡсасы ла, фермер ҙа даими рәүештә сүпте утап торорға тейеш... Был ҡараш шәхси характерыңды булдырыуға һәм уны нығытыуға ла ҡағыла. Берәү ҙә беҙҙең проблемаларыбыҙҙы һәм ауырлыҡтарыбыҙҙы үҙебеҙҙән башҡа яҡшы белмәй, шуға күрә һәр ҡайһыбыҙға, "баҫыуыбыҙ" тере һәм уңдырышлы булһын өсөн, характерыбыҙҙы утап торорға кәрәк.*

***Мэттью Адамс.***

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

22 - 28 СЕНТЯБРЬ (ҺАРЫСАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№38 (508)

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ҡарттар һүҙен тоҡҡа һал,**
йәштәр һүҙен янсыҡҡа һал
3

**Молдова башҡорттары**
7

**Ауырлыҡтар бер ни түгел,**
ул кәслөнө сыныҡтыра, ә көсһөҙҙө - һындыра
8-9

**Күҙгә күренмәҫ хәүеф...**
һәр кемдең өйөндә
12

14 ТВ-программа









## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Коммуналь түләүҙәр буйынса тарифтар йылдан-йыл арта, ә беҙ үҙебеҙҙең ни өсөн түләгәнебеҙҙе аныҡ ҡына белмәйбеҙ ҙә...

**Зөһрә ХӨСНӨТДИНОВА, пенсионер:** Белергә тырышырға кәрәк. Мин үҙем егерме йылдан ашыу торлаҡ-коммуналь хужалыҡ системаһында эшләп киткәнлектән, унда халыҡты нисек төп башына ултыртыуҙарын бик яҡшы беләм. Шуға күрә йыш ҡына башҡа шундай уй килә ине: коммуналь хеҙмәттәр өсөн артыҡ аҡса түләп, пенсионер башым менән кемделер аҫырап ятырғамы, әллә ул аҡсаға кәрәкле дарыуҙар һатып алырғамы? Шунан керештем иҫәп-хисап яһарға. Һәр төрлө ҡағыҙ һәм документтар менән иртәнән кискә тиклем, хатта төндәр буйына ултырырға тура килде. Барып сыҡһа, был эш үҙ хаҡына торошло икәнлегендә шигем юҡ ине. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: йылылыҡ өсөн, мәҫәлән, беҙ ҡалала раҫланған норматив буйынса түләйбеҙ, ләкин норматив - бер нәмә, ә ҡулланыу күләме бөтөнләй икенсе төрлө күренеп тора. Беҙҙең өйҙәргә килгән йылылыҡ хаҡынан әллә күпмегә артыҡ түләтеүҙәрен иҫәп-хисап ярҙамында иҫбатларға кәрәк ине. Был хатта миңә лә ауыр бирелде, ә башҡалар өсөн бында йырып сыҡҡыһыҙ буталсыҡ, шуға ла "Өфө граждандарының торлаҡ хоҡуғын яҡлау" йәмәғәт ойошмаһы, прокуратура вәкилдәренең ярҙамына таянырға тура килде. Был эште башҡарыуға ике йыл китте, 8 тапҡыр суд ултырышында булдым. Һөҙөмтәлә суд минең файҙаға 2008-2011 йылдар өсөн ҡайтанан иҫәп-хисап яһап, 8 мең артыҡ түләтелгән аҡсаны кире ҡайтарырға тигән ҡарар сығарҙы. Унан һуң минең менән бер йортта йәшәүселәргә лә бөтәһе 300 мең һумға яҡын суммаға ҡайтанан иҫәп-хисап яһалды. Минең тәжрибәне ҡабатларға теләүселәргә шундай кәңәштәр бирер инем: иң тәүҙә үҙегеҙ йәшәгән райондың Торлаҡ хужалығы идаралығына йылылыҡ өсөн ҡайтанан иҫәпләүҙәр яһауҙы һорап, ғариза яҙығыҙ. Шул уҡ ваҡытта үҙегеҙ иҫәп-хисап башҡарыу өсөн йылылыҡҡа тотош йорт буйынса түләтелгән сумманы, ә ресурс менән тәьмин итеүсе ойошманан йылылыҡ энергияһы өсөн идарасы ойошманан түләтелергә тейешле хаҡ тураһында мәғлүмәттәрҙе юллап алығыҙ. Шуны ла иҫтә тотоғоҙ: айырым граждандарҙың яңғыҙына ғәҙеллек юллауы бик ауыр мәсьәлә, шуға күрә квалификациялы ярҙам алыу өсөн БР буйынса Роспотребнадзор идаралығына, БР Дәүләт торлаҡ инспекцияһына йәки прокуратураға мөрәжәғәт итергә кәрәк.

**Рәзилә ХӘМИТОВА, йорт хужабикәһе:** Ил-йорт ни күрһә, шуны күрәбеҙ инде беҙ ҙә. Квитанция килеү менән, аҡса барҙа түләй һалайыҡ, тип, йүгереп барып түләп тә ҡуябыҙ, ҡайҙа инде ул тикшереп, иҫәпләп ултырыу. Ә бит иҫәпләһәң, ысынлап та, әллә күпме "гонаһ"тары фашланыр ине торлаҡсыларҙың. Күренеп торғандарына ла "күҙ йомоп" йәшәй бирәбеҙ бит, уйлап ҡараһаң. Мәҫәлән, беҙҙең йорт подъезында һәр ваҡыт бысраҡ, сүп-сар була, ә беҙҙән йыйыштырыу өсөн түләтеп киләләр. Ниндәйҙер ҡатын килеп, онотҡанда бер саң туҙҙырып һепереп китә, ә йыуып йөрөгәндәрен күргән юҡ. Йыш ҡына ут та булмай. Йәйен был әллә ни һиҙелмәй ине, хәҙер эңер иртә төшкәс, подъезда ҡараңғы була. Мәктәптән ҡайтҡан бала-саға өсөн хәүефләнәбеҙ. Эштә булғандарҙың балаһын ҡаршы алыу мөмкинлеге юҡ. Подъезды яҡтыртыу өсөн тағы түләйбеҙ. Ваҡ-төйәк кеүек күренһә лә, бына шулай итеп тамсынан күл йыйылалыр ҙа инде. Унан һуң, күп кеше йәйге айҙарҙа өйҙә тормай: ялға йә баҡсаһына китә. Беҙ үҙебеҙ, мәҫәлән, балаларҙы алып, өс ай буйы баҡсала йәшәнек. Һеҙҙең һорау уйланырға мәжбүр итә, иртәгә үк үҙебеҙҙең ЖЭУ-ға барып, әлеге мәсьәләләрҙе күтәрергә тура килер.

**(Дауамы 2-се биттә).**

## "КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 10 ЙЫЛ

# ШИФАЛЫ ГӘЗИТ

**Гәзитте мин сыға башлағандан алып уҡыйым. Ундағы материалдарҙы туғандарыма, ҡунаҡтарыма, коллегаларыма күрһәтәм, уҡытам, уларҙың да минең кеүек ҡыуаныуын теләйем.**

Йән тыныслығы бирә миңә был гәзит, уны уҡып, күңелемә ял алам. Уны уҡыһам, стрестан ҡотолам. Ауыр уйҙарға тарып, донъя хәсрәте баҫһа, ҡулыма "Киске Өфө"нө алып ҡайһы ғына ерен алып уҡыһам да, уның сихри көсө мине дауалай башлай. Доға кеүек шифалы ул был баҫма. Миңә гәзиттең бигерәк тә "Диалог" рубрикаһындағы сығыштар оҡшай. Тағы ла ауылдан Өфөгә килеп, үҙ урындарын табып, уны яулаусы йәш милләттәштәрем хаҡындағы портреттар бигерәк фәһемле. Гәзиттең уҡыусылары ауылдарҙа ла күп булыуы ошо мәҡәләләргә бәйлелер тип уйлайым, йәғни гәзит баш ҡала баҫмаһы булараҡ, ҡала менән ауылды органик рәүештә тоташтырыусы күпер. Баҫма кешене, бигерәк тә йәш кешене алдына маҡсат ҡуйып йәшәргә өйрәтә. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булараҡ, мин был яҙмаларҙы дәрестәремдә файҙаланам.

Гәзит оҙон ғүмерле булһын, үҙенең позицияларынан тайпылмаһын. Ул - ғаилә, туғандар гәзите. Илдә ниндәй генә сәйәси ваҡиғалар, түңкәрелештәр булған хәлдә лә, "Киске Өфө"нө уҡыған кешеләр юғалып ҡалмаҫ, үҙен һәм туғандарын һаҡлап ҡалырлыҡ көс таба алыр тип ышанам. "Киске Өфө"нө сығарған һәм уҡыған милләт тә юғалмаҫ. Илдә, дәүләттә ниндәй генә система, ижтимағи ҡоролош булһа ла, ул гәзит һәр заман өсөн дә ярарлыҡ кәрәкле гәзит буласаҡ, тип уйлайым. Сөнки "Киске Өфө" кешелек һәм милләт өсөн мәңгелек ҡиммәттәрҙе күтәргән гәзит.

**Ғәлимә ҒӘЛИЕВА.**
**Илеш районы Үрге Йәркәй ауылы.**



БАШ ЙОРТТА...



# ҠУНАҠТАР МАҠТАЙ УЛ, үҙебеҙ ҙә маҡтарлыҡ булһын...

**Өфөбөҙ Рәсәй кимәленә етеп, донъя аренаһына сыҡты. Был хаҡта оҙаҡламай уҙасаҡ донъя чемпионаттары, сәйәси һәм иҡтисади саралар асыҡ һөйләй. Ул ваҡиғаларға әҙерлек әле үк башланды һәм улар барышында баш ҡала тағы ла оло үҙгәрештәр кисереп, матурайып ҡаласағына шик юҡ.**

Ләкин һәр миҙалдың ике яғы булған кеүек, был үҙгәрештәрҙең дә кире яҡтары бар, әлбиттә. Мәҫәлән, юлдарҙы киңәйтәбеҙ, тип, автомобиль юлы буйындағы байтаҡ ағастар киҫелде, ә хәҙер сират йорт ихаталарындағы ағастарға ла етте. Быларҙың барыһы ла ҡала халҡының йәшәйешен яҡшыртыу, уларға уңайлыҡтар тыуҙырыу һәм киләсәк ҡунаҡтарҙа ыңғай фекер уятыу өсөн эшләнгәнлеге аңлашыла, әлбиттә, ләкин төбө-тамыры менән аҡтарылып ятҡан ағастарҙы күреү ҡыҙғаныс. Ҡарт ағастарҙан арыныу кәрәк, әлбиттә, ләкин уйламайнитмәй бынамын тигән ағастарҙы имгәтеү күренештәре лә булды бит. Шулай ҙа оло юлдар буйындағы ҡырҡылған ағастар урынына йәш үҫентеләр ултыртып, тирә-яғын матурлап ҡуйыуҙарын күреү Өфөнөң артабан да йәшеллеккә сумып ултырған ҡала буласағына өмөт тыуҙыра.

Ҡунаҡтарға килгәндә, мин әлегә тиклем бер тапҡыр ҙа улар тарафынан Өфө хаҡында насар һүҙ ишеткәнем булманы. Тыуған ҡалаң тураһында ыңғай баһалама ишетеү күңелдә ҡыуаныс һәм ғорурланыу тойғоһо уята. Айырыуса һуңғы ваҡытта Салауат Юлаев һәйкәле тирәһе үҙгәрештәр кисерҙе һәм унда халыҡ тағы ла күбәйҙе. Матур төҫтәргә мансылған фонтан эргәһендә, башҡорт моңо ағылған майҙанда йөрөү, ысынлап та, күңелдә һиллек һәм тыныслыҡ тойғоһы уята. Шулай уҡ милли аш-һыу тәҡдим иткән тирмәнең булыуы ла күптәрҙә ыңғай ҡараш тыуҙыра. Мәҫәлән, яңыраҡ ҡына "Туғанлыҡ" Халыҡ-ара фестиваленә килгән ҡунаҡтарҙың беҙҙең аш-һыуҙы маҡтай-маҡтай сәй эсеп ултырыуына шаһит булдым.

Әйткәндәй, баш ҡалала барған ошо оло сара хаҡында мәғлүмәттең аҙ булыуы күңелде ҡырҙы. Ҡаланың ниндәй театрында ҡайһы театрҙың спектаклен ҡарарға мөмкин икәнлеген белдергән мәғлүмәттәр булманы гәзиттәрҙә лә, урамдарҙағы афиша таҡталарында ла. Барлыҡ афиша таҡталары ла сит ил артистарының буласаҡ сығышы, цирк һәм башҡа саралар хаҡында мәғлүмәттәр менән тулы. Ә бындай тамашалар бит бар халыҡты ла ҡыҙыҡһындырмай.

**Гөлсөм АБДУЛЛИНА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Коммуналь түләүҙәр буйынса тарифтар йылдан-йыл арта, ә беҙ үҙебеҙҙең ни өсөн түләгәнебеҙҙе аныҡ ҡына белмәйбеҙ ҙә...



**(Башы 1-се биттә).**

***Альфред ЗИННӘТУЛЛИН, Өфө Торлаҡ хужалығы идараһының генераль директор урынбаҫары:*** Әгәр йорттарға йылылыҡ иҫәпләүсе дөйөм йорт приборы ҡуйылмаған булһа, йылылыҡ өсөн түләү норматив буйынса иҫәпләнә. Уны БР Тарифтар буйынса дәүләт комитеты билдәләй. Иҫәп приборы ҡуйылған хәлдә лә уны ҡуйған йылда шулай уҡ норматив буйынса түләнә, унның ҡарауы, йыл аҙағында приборҙағы күрһәткестәр буйынса ҡайтанан иҫәп-хисап яһала. Киләһе йылға иҫәпләүҙәр иһә былтырғы сығымдар нигеҙендә яһала. Мәҫәлән, йорт буйынса былтыр - 1000 гкал, быйыл 800 гкал йылылыҡ тотонолған, ти. Айырма - 200 гкал йортта йәшәүселәргә кире ҡайтарып иҫәпләнә, ә киләһе йылға түләүҙәр әлеге 800 гкал иҫәбенән хисаплана: 800 гкал 12 айға бүленә. Килеп сыҡҡан һан айлыҡ түләү суммаһын аңлата.

***Марат ГӘРӘЕВ, хәбәрсе:*** Баш ҡала прокуратураһы асыҡлауынса, өфөләләр сүп-сар сығарыу өсөн дүрт йыл буйына тейешенән бер ярым тапҡырға артығыраҡ түләп килгән. 2007 йылда уҡ әле Өфө ҡала Советы сүп-сар сығарыу өсөн һәр кешегә йылына уртаса 1,5 кубометр өсөн түләү һалырға ҡарар сығарғайны. Ошо норматив буйынса беҙ 2012 йылға тиклем түләп килдек. Өйгә килтерелгән квитанцияларҙа был сумма "Содержание" тигән пунктҡа индерелгән. Әммә 2000 йылғы тағы бер документ бар, унда аҡҡа ҡара менән: ҡалала йәшәүсе һәр кем йылына 1 кубометр сүп-сар "яһай", тип яҙылған. 1 кубометр сүп-сарҙы ҡаланан ситкә - ҡыйылыҡҡа сығарып түгеү бөгөн 83 һум 71 тингә төшә. Ә беҙҙән 1,5 кубометр сүп-сар өсөн түләтелә килгән. Иҫәпләп ҡарағандан һуң ҡала халҡынан йылына ғына 41 миллион 855 мең һум артыҡ түләтеүҙәре асыҡланды. Һәр тинебеҙҙе иҫәпләп, закон, положениеларҙы белеп йәшәһәк, бәлки, бындай хәлгә ҡалмаған да булыр инек.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.**

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**1 сентябрҙән һалҡын һәм эҫе һыуға, шулай уҡ йылылыҡ һәм канализация өсөн тарифтар тағы артты. Ә электр энергияһына һәм газға хаҡтар әлегә үҙгәрмәй - элек күпме түләгән булһаҡ, шул килеш ҡала. Тарифтарҙың артыуы быйыл ғына икенсе тапҡыр күҙәтелә, тәүгеһе 1 июлдә булғайны. "Коммуналь хеҙмәттәргә түләү йыл башынан бөтәһе 12 процентҡа ғына да артмаясаҡ,- тиҙәр БР Тарифтар буйынса дәүләт комитетында.- Ә инде газ менән йылытылған йорттарҙа был 15 процент самаһы тәшкил итәсәк".**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!




**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле етте. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тогролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана.**

● Шулай итеп, 2013 йылдың тәүге яртыһына **50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 360 һум 24 тингә яҙылырға була**. Сентябрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе 4 уҡыусыбыҙға - М. Әхтәмовтың "Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре", 10 уҡыусыға - Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек", 10 уҡыусыға - "Айыҡ туй сценарийҙары", 10 уҡыусыға Әхмәр Үтәбайҙың "Мин айыҡ тормош башланым" китаптарын бүләк итәсәкбеҙ.

● Ә кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**.
Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**.
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓БР Дәүләт Йыйылышы- Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев рәйеслегендәге ойоштороу комитеты Республика көнөнә әҙерлек сараларын тикшерҙе. Байрам айҡанлы иң яҡшы хеҙмәткәрҙәргә ҡотлау һүҙҙәре еткереләсәк, Башҡортостан Президенты стипендиаттарына дипломдар, журналистика өлкәһендәге иң яҡшы әҫәрҙәр өсөн Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге премия, фән һәм техника өлкәһендәге дәүләт йәштәр премиялары тапшырыласаҡ, конкурста еңеүсе башҡорт һәм рус теле уҡытыусыларына грант биреләсәк. Байрамдың мәҙәни өлөшөндә шиғриәт кисәһе, "Өфө - дуҫлыҡ һәм берҙәмлек ҡалаһы" фестивале, милли мәҙәниәттәр фестивале уҙғарыласаҡ. 9 октябрҙә республика етәкселәге Дуҫлыҡ монументына сәскәләр һаласаҡ.

✓РФ Дәүләт Думаһында Киң мәғлүмәт саралары буйынса айырым комитет асыу планлаштырыла, тип хәбәр итте түбәнге палата рәйесе Сергей Нарышкин. Әлеге ваҡытта киң мәғлүмәт сараларының эшмәкәрлегенә Мәҙәниәт буйынса комитет составына ингән Мәғлүмәт сәйәсәте, мәғлүмәт технологиялары һәм элемтә буйынса комитет бүлеге контроллек итә. Дәүләт Думаһы спикеры һүҙҙәренсә, яңы комитет быйыл көҙ эшләй башлаясаҡ. Уны асыуға киң мәғлүмәт саралары эшмәкәрлегенә яңы технологиялар индереү һәм йәмәғәт телевидениеһын булдырыу сәбәп булды.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов "Вести Башкортостана. События недели" тапшырыуында республика халҡының Башҡортостандағы сәйәси һәм социаль-иҡтисади хәлгә ҡағылышлы һорауҙарына яуап бирҙе, социаль проекттар тураһында һөйләне, йәйҙең төп сәйәси ваҡиғаларына баһа бирҙе, шулай уҡ артабанғы эшмәкәрлектең өҫтөнлөклө йүнәлештәрен билдәләне.

✓Мәскәүҙә үткән боксерҙар кисәһендә Башҡортостанда киң билдәле боксер, Европа чемпионы Денис Шафиков та ҡатнашты. Ул һигеҙ раундлы ярышта Кениянан килгән һуғышсы Джеймс Оньянгоны еңде. 26 йәшлек Рәсәй атлетының профессиональ карьераһында 30-сы еңеүе булды был, йәғни ул профессиональ рингтағы 31 һуғышта ҡатнашып, 30 тапҡыр еңә, бер тапҡыр ничья була һәм бер тапҡыр ҙа еңелмәй.

✓ "Информреклама"ла Әмир Ишемғолдың "Башҡортостандың һеркә таратыусы үҫемлектәре" тигән китабы баҫылып сыҡты. Тиражы - 1 мең дана. Китапта республиканың ҡорттар бал йыйған үҫемлектәре тураһындағы тикшеренеү мәғлүмәттәре тупланған.

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# ҠАРТТАР ҺҮҘЕН ТОҠҠА ҺАЛ,

## Йәштәр һүҙен янсыҡҡа һал

**Ололар һүҙе, аҡһаҡалдар кәңәше, халыҡ аҡылы хаҡында бик күп мәҡәл-әйтемдәр бар. Уларҙың бер нисәүһен әйтеп үтәйек: "Мәҡәл һаҡалдан олораҡ", "Оло һүҙен тыңламаған оролған да бәрелгән", "Боронғолар һүҙе - китап", "Ҙурҙар һүҙен тыңламаған ҙур бәләгә тарыр", "Ҡарттар һүҙен ҡар баҫмаҫ", "Оло әйтһә, хаҡ әйтер", "Оло алдында телен тыймаған, теле ауыҙына һыймаған" һ.б. Был мәҡәл-әйтемдәрҙә, нисектер, тик ололар һүҙе генә хәҡиҡәт тип ҡабул ителеп, йәштәр инициативаһы һанға һуғылмаған кеүек. Сөнки тормоштоң, йәшәү шарттарының үҙгәреүе ҡайһы берҙә мәҡәл-әйтемдәргә лә икенсе күҙлектән ҡарауҙы талап итә. Эҙләнә торғас, йәштәрҙең ниәт-теләге лә иҫәпкә алынған әйтемдәрҙе лә таптым. Улар: "Бер олоно, бер кесене тыңла", "Олоно оло итә бел, кесене кесе итә бел", "Ҡарттар һүҙен тоҡҡа һал, йәштәр һүҙен янсыҡҡа һал". Ошолары хаҡында киңерәк планда фекер йөрөтөп ҡарайыҡ.**



Бер ауыл йәштәре донъя хәлдәре, милләт яҙмышы, ауылдарының киләсәге хаҡында фекер алышыу, кәңәш һорау ниәте менән йыйылышып алып, аҡһаҡалдарының йортона килгән һәм уға килеүҙәренең маҡсатын әйтеп биргән. Аҡһаҡал уларға тотҡан ерҙән һындырмаҫҡа, сабырыраҡ булырға, боронғоларҙың аҡылына таянып эш итергә саҡырып һүҙ әйтә башлаған икән, йәштәрҙең араһынан бер сабырһыҙыраҡ өтәләне уның һүҙҙәрен бүлдереп:

- Һеҙҙең һүҙҙе тыңлап, һәр ваҡыт сабыр итеп ултырып, ошо хәлгә ҡалдыҡ та инде, олатай. Хәҙер боронғоларҙың аҡылы менән йәшәр заман үтте. Беҙ үҙебеҙсә, яңыса йәшәргә теләйбеҙ, был һүҙҙәрегеҙҙе, ана, мәсеткә барып, ҡарттарға һөйләгеҙ, - тип үҙенең киҫкен дәғүәһен белдергән.

- Ярар, ә бына "үҙебеҙсә, яңыса йәшәргә теләйбеҙ" тигәнеңде нисегерәк итеп аңларға була һуң, улайһа, улым? - тигән һорау ҡуйған уға аҡһаҡал ипле генә итеп.

-Яңыса, үҙебеҙсә, ә һеҙҙең моҡ заманғы аҡылығыҙ күптән иҫкерҙе инде. Хәҙер атом, Интернет, мәғлүмәт заманы килде. Ҡайһы бер кис яһалған асыштар хатта таң атҡансы иҫкереп өлгөрә. Ә һеҙ һаман да йәштәрҙе тарихҡа, иҫкелеккә һөйрәп маташаһығыҙ, беҙҙең зиһендәрҙе боронғолоҡ һаҙлығына батыраһығыҙ, етте! - тиеп оторо ярһыған йәш кеше.

Ҡыҫҡаһы, йәштәрҙең аҡһаҡал менән һәүетемсә генә башланған әңгәмәһе ошо егеттең яндырайлығы арҡаһында өҙөлөп ҡалған. Йәштәр барыһын да күтәреп һуғып, аҡһаҡалдың йортонан сығып киткән егет артынан эйәргән.

Егет тиңдәштәре араһында абруйлы һаналғандыр инде, ауыл йәштәре ошонан һуң ололарҙың әйткәнен һанға һуҡмай, күп мәсьәләләрҙе үҙҙәренсә хәл итә башлаған һәм был хәл ололарҙы һәм аҡһаҡалды ла борсоуға һалған. Ул йәштәр менән боҙолған араны ялғарға теләп, уларҙың йортона килеп тә, башҡа төрлө лә һөйләшергә тырышҡан, әммә йәштәр уның һүҙенә ҡолаҡ һалырға ла теләмәгән.

Көндәрҙән бер көндө аҡһаҡал теге яндырай егеттең бер үҙен ҡунаҡҡа саҡырған. Ололоҡлап ҡаршы алып, түренә мендереп ултыртып, алдына бишбармаҡ ҡуйған. Кәрәкле доғалар уҡылып, йорт хужаһы ашҡа хуш әйтеп, бисмилла иткәс, егет ҡалаҡ менән аштың һурпаһын алып, ауыҙына оҙатҡан да, ҡапыл ултырған урынынан һикереп килеп тороп, аҡһаҡалға:

-Ошо йәшкә етеп, һаман да бишбармаҡты нисек бешерергә белмәйһегеҙме ни, олатай? Мине мәсхәрә итер өсөн ҡунаҡҡа саҡырҙығыҙмы? - тип ишекле-түрле йөрөргә тотонған йөҙө ала-сола булып буҙарған егет йораты.

- Нимә, оҡшаманымы ни бишбармаҡ, бына тигән тәмлесе, телеңде йоторлоҡ, - тип кеткелдәй-кеткелдәй бишбармаҡ ашай икән аҡһаҡал.

- Һуң, ошоға тиклем бишбармаҡҡа шәкәр, бал, хәлүә һалғандарын ҡасан күргәнегеҙ бар, олатай. Ниңә мине мыҫҡыл итәһегеҙ? - тип оторо ярһыған яндырай.

-Һуң, төнәгөн үҙегеҙ, беҙ үҙебеҙсә, яңыса йәшәргә теләйбеҙ, тип һүҙ күтәрмәй сығып киткәндә, мин бит бер нәмә лә өндәшмәнем, һеҙгә үсекмәнем. Ултыр, улым, аша, бына һинең алдыңда, үҙегеҙ теләгәнсә, заманса бешерелгән бишбармаҡ, - тигән аҡһаҡал һаман да егеттең түҙемлеген һынарға теләгәндәй.

Ошонан һуң аҡһаҡалдың әбейе егеткә ҡәҙимгесә, боронғоса бешерелгән бишбармаҡ алып килтереп ултырҡан. Егет йораты, аҡһаҡалдың кинәйәле шаяртыуын аңлап, кире ултырып, көлөшә-көлөшә һыйланып ултырған. Һәр бер әкиәттең аҙағы яҡшылыҡ менән тамамлана, тигән һымаҡ, ошонан һуң был ауыл йәштәре аҡһаҡалдың һүҙен тыңлап, ололарҙың кәңәшенә ҡолаҡ һалып йәшәй башлаған, ти.

Был хәл булғандырмы-юҡмы, әммә бик оло кинәйә ята булыр был тарихтың асылында. Йәштәр, ысынлап та, тотҡан ерҙән һындырырға ярата, маҡсаттарына тиҙ арала барып еткеһе килә, улар өсөн күпселектә маҡсатҡа барған юл түгел, унда барып етеү мөһимерәк. Ололар инде, киреһенсә, боронғоларҙың аҡылына таянып, ете ҡат үлсәп, бер ҡат киҫеп, сабырлыҡҡа өндәй. "Ҡарттар һүҙен тоҡҡа һал, йәштәр һүҙен янсыҡҡа һал" тигән әйтемгә килгәндә, бында инде ололарҙың тәжрибәһе, аҡылы тупланған арбаға йәштәрҙең ажғырып торған дәртен, энергияһын арғымаҡ итеп егеүҙе күҙ алдына килтереп булалыр. Ни өсөн ҡарттар һүҙен тоҡҡа, йәштәрҙекен янсыҡҡа һалырға кәрәк? Уларҙың кәңәше, аҡылы кешегә ғүмер буйына кәрәк, ә әлеге мәл, хәҙерге көн өсөн янсыҡ булып хеҙмәт итерлек дәрт, энергия ҡулай. Бик тәрән мәғәнә һалынған был әйтемгә. Тик теге ауылдағы һымаҡ аҡһаҡалдарыбыҙ ғына иҫән булһын.

Аҡһаҡалдар аҡылы менән йәштәрҙең көсө, дәрте гармониялы мөнәсәбәттә булған ваҡиғалар тарихта бик күп. Миҫалға Зәйнулла ишан Рәсүлев менән Әхмәтзәки Вәлиди, Юлай Аҙналин менән Салауат Юлаев мөнәсәбәттәрен генә килтерергә булыр ине. Вәлиди Зәйнулла ишандың йоғонтоһо булмаһа, үҙенең бер байҙа приказчик ҡына булып йөрөрөн күҙаллаһа, Салауат атаһының Пугачевҡа ҡаршы әҙерләгән яугирҙәрен батша армияһына түгел, Пугачев ғәскәренә алып бара. Бында атай менән улдың араһында ниндәй ҡаршылыҡ, бәхәс булғанлығын беҙ белмәйбеҙ. Һәр хәлдә, теге ауылдағы аҡһаҡал менән яндырай егет бәхәсе ише генә булмағандыр ул ваҡиға.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Ҡарттар һүҙен тоҡҡа һал, йәштәр һүҙен янсыҡҡа һал" әйтеменең тулы мәғәнәһе гәзитебеҙҙең 2009 йылда сыҡҡан 24-се һанында Сәйфулла Әмиров үҙенең ( "Милләтем йөрәгеңде ас, бына мин килдем...") әңгәмәһендә әйтеп бирә: "Мин хәҙерге йәштәребеҙгә һоҡланып бөтә алмайым. Беҙ кредитҡа ун мең һум аҡса алырға ла баҙнатсылыҡ итмәгән быуын вәкилдәре. Ә бына беҙҙең балалар был йәһәттән бик тәүәккәл. Ҙур суммала кредит алырға баҙнатсылыҡ иткән кеше - ул киләсәгенә, тимәк, үҙ көсөнә ышаныусы кеше. Йәштәрҙә хәҙер ҡурҡыу тойғоһо юҡ һәм был сифат бик ҙур әһәмиәткә эйә. Милләт ошо юлды үтергә тейеш... Беҙ ошо йәштәребеҙ арҡаһында яңы баҫҡысҡа күтәрелдек. Ауылда колхоз-совхоздар һаҡланмағандан ғына, кемдер ер һөрөп сәсмәгәндән генә милләтебеҙ юғалып ҡалмаясаҡ. Дүрт мең йыл элек йәшәгән бер фәйләсүф йәштәргә ҡарап былай тигән: "Хәҙер шундай йәштәр китте. Улар ата-әсәһен тыңламай, тормошҡа еңел ҡарай, яраҡлаша белмәй..." Беҙҙең атайҙар ҙа беҙгә шулай тигәйне: "Бына беҙ үлгәс, һеҙ тормошто алып китә алмаясаҡһығыҙ..." Минеңсә, беҙ милләт өсөн юҡҡа борсолабыҙ. Әхмәтзәки Вәлиди "Беҙ - аҡтамыр киҫәге" тип әйткән бит. Минеңсә, беҙҙең милләт баҙар иҡтисадына, бүтән милләттәрҙән айырмалы, үҙенең кешелек йөҙөн һаҡлап инеп килә..."**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов баш ҡаланың яңы йылытыу осорона әҙерлеген тикшереү өсөн "Өфө инженер селтәрҙәре" объекттарында булды. "Өфөнөң йылылыҡ хужалығын модернизациялау һәм реконструкциялау буйынса ҙур бурыстар атҡараһы бар", тип билдәләне сәйәхәтенең һуңында Ирек Ишмөхәмәт улы.

✓Башҡортостан Республикаһы буйынса Росреестр идаралығы хәбәр итеүенсә, йылдың тәүге яртыһында тотош республикала төҙөлөшкә өлөш индереү килешеүҙәре һаны былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 1520-гә артып, 4139-ға еткән. Был үҫеш төҙөлөш күләменең артыуына, халыҡтың күп фатирлы йорттарҙа төрлө социаль программалар буйынса торлаҡ алыу, шулай уҡ фатир һатып алыу мөмкинлеге артыуына бәйле.

✓Киләһе йылда Өфөнөң Сипайлово биҫтәһендә спорт комплексын төҙөп бөтөү планлаштырыла. Объект Бикбай урамында, "Приозерный" физкультура-сәләмәтләндереү комплексы янында урынлашҡан. Киләсәктә улар күп профилле берҙәм спорт үҙәген тәшкил итәсәк. Төҙөлөп ятҡан комплекста өс бассейн була. Уларҙан тыш, фитнес, бокс, көрәш менән шөғөлләнеү өсөн залдар йыһазландырыла. Комплекстың автомобилдәр ҡуйыу урыны яҡынса 200 машинаға иҫәпләнгән. Спорт комплексын төҙөү урынында ошо көндәрҙә Өфө округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов булды. "Өфөлә был инвесторҙар аҡсаһы иҫәбенә төҙөлгән, заманса йыһазландырылған бындай кимәлдәге беренсе спорт комплексы, - тине Ирек Ялалов. - Шуға күрә төҙөлөштөң уңышлы тамамланыуы мөһим".

✓Рәсәй Юстиция министрлығының Башҡортостан буйынса идаралығы "Граждандар көсө" бөтә Рәсәй сәйәси партияһының төбәк бүлексәһен дәүләт теркәүе тураһында ҡарар ҡабул итте. Шулай итеп, 17 сентябргә ҡарата мәғлүмәттәр буйынса, республикала сәйәси партияларҙың 21 төбәк бүлексәһе теркәлгән.

✓Рәсәйҙең Иҡтисади үҫеш министрлығы бойороғо менән Башҡортостан Республикаһы буйынса Росреестр идаралығы хәҙер Дәүләт кадастр баһаһы мәғлүмәттәре фондын йыйыу операторы бурысын да башҡарасаҡ. Әлеге ваҡытта Мәғлүмәттәр фонды составына кадастр баһаһын билдәләү, баҙар хаҡын билдәләү буйынса отчеттар, һанлы тематик карталар, шулай уҡ баһалау объекттары тураһында системаға һалынған мәғлүмәттәр инә.

**"Башинформ"дан.**

*✓ Сергей Кущенко "Башҡортостанлыларҙың танышлыҡтары күп, шуға ла улар яҡшы һауа торошон да үҙҙәре теләгәнсә һорап ала", - тип мәрәкәләне һәм чемпионатты асыҡ тип иғлан итте.*



...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ЙӘРМИНКӘЛӘРҘӘ...

## иң ышаныслы ризыҡ



**Көҙ етте, тимәк, республика ҡалаларында ауыл хужалығы йәрминкәләре башланды. Өфөлә йәрминкәләр инде 20 йылдан ашыу үткәрелеп килә. Уларҙың маҡсаты - ҡала халҡына етештереүсе ҡулынан сифатлы продукттар һатып алыу мөмкинлеге биреү, төп ризыҡтар - йәшелсә, картуф, иткә - хаҡтарҙың артыуын тотҡарлау. Йәрминкәләр ауыл хужалығы етештереүселәренә бер ярҙам булып тороуы яғынан да әһәмиәтле сара.**

- Быйыл йәрминкәләр үткән йылдарға ҡарағанда күпкә иртәрәк, 9 августа башланды. Бынан тыш, август айында беҙ махсус бал йәрминкәләре ойоштороҡ. Уҙған ял көндәренән башлап ауыл хужалығы йәрминкәләре ҡаланың бөтә райондарында, майҙансыҡтарҙа үтә, - тине ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Марат Ғәлиуллин журналистар менән осрашыуҙа.

Билдәләнеүенсә, быйыл йәрминкәләр шәмбе, йәкшәмбе көндәрендә октябрь аҙағына тиклем үтәсәк. Ноябрҙә иһә һауа торошона ҡарап үткәреләсәк. Ҡышын ит йәрминкәләрен уҙғарыу көтөлә. Етештереүселәргә һатыу урындары бушлай бирелә. Ике көн эсендә генә Өфөгә ауыл хужалығы тауарҙары менән 38 райондан ике меңдән ашыу машина килгән. Ете район үҙ биләмәһендәге етештереүселәрҙең тауарҙарын йөк машиналарында алып килгән. Республиканың Ауыл хужалығы министрлығы ла райондарға етештереүселәрҙе ойоштороп, йәрминкәләргә йөк машиналарында алып килергә тәҡдим итә. Был, беренсенән, аралашсы алыпһатарҙарҙан ҡотолорға ярҙам итһә, икенсенән, хужаларға үҙе үҫтергәнде үҙе һатыу мөмкинлеге биреп, хаҡтарҙың арзанайыуына ла булышлыҡ итә.

Йәрминкәлә продукттарға хаҡ яҡынса 20 процентҡа осһоҙораҡ килеп сыға. Быйыл унда картуфтың бер килограмы 12-15 һум тора. Ғәҙәттә, иртәнсәк хаҡ юғарыраҡ ҡуйыла, әммә төштән һуң төшә. Шулай ҙа тауар быйыл йылдамыраҡ үтә, ти ойоштороусылар. Картуф, ит, бал үткән йылға ҡарағанда күберәк һатыла. Баш ҡалаға яҡын ятҡан райондар - Кушнаренко, Благовар, Шишмә, Ҡырмыҫҡалы, Иглин райондары йәрминкәлә әүҙем ҡатнаша. Халыҡ бигерәк тә ҡаланың Октябрь районында Спорт һарайы алдындағы майҙанда, шулай уҡ Йәштәр һарайы майҙанында, Дим районының Правда урамындағы йәрминкәлә күп йыйыла.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Өфөләләрҙең күбеһе ауыл хужалығы йәрминкәләренә ыңғай ҡарай. Ҡала халҡының 87 проценты ҡышҡылыҡҡа картуф, йәшелсә, итте тап йәрминкәләрҙә һатып ала. Сара ваҡытында һатыу урынына 50 меңгә яҡын халыҡ килеп китә.**

О, СПОРТ!

# ЙӘЙГЕ БИАТЛОНДА...

## беҙҙекеләр алда килә

**Ошо көндәрҙә Өфө ҡалаһының "Биатлон" спорт-һауыҡтырыу комплексында Йәйге биатлон буйынса XVII Донъя чемпионаты башланып тора. Был чемпионатта Рәсәй Федерацияһы йыйылма командаһы ағзалары, яҡташтарыбыҙ - өс тапҡыр донъя чемпионы Максим Чудов, был чемпионатта юниорҙар өсөн сығыш яһап, чемпион исеменә лайыҡ булып та өлгөрөргән йәш егет Антон Бабиков һәм билдәле биатлонсы Ольга Вилухина ла бар.**



19 сентябрь 19.30 сәғәттә "Биатлон" комплексында Чемпионатты асыу сараһында Рәсәй Федерацияһы Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабич, Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов, Рәсәй Биатлонсылар союзының беренсе вице-президенты Сергей Кущенко ҡатнашты. Михаил Бабич республиканың был чемпионатҡа ентекле әҙерләнеүен, уны уңышлы үткәреү өсөн күп эштәр эшләнеүен билдәләне. Ул шулай уҡ илдә спортҡа милли сәйәсәт кимәлендә иғтибар бүленә башлауын һыҙыҡ өҫтөнә алды һәм ошондай стадиондар, бындай ярыштар ни тиклем күберәк булһа, беҙҙең йыйылма команданың үҙәген билдәләгән йәштәр, уның киләсәген тотоп торған балалар спортҡа нығыраҡ ылығасағы, сәләмәт буласағы, яҡшы шарттарҙа шөғөлләнә аласағы тураһында уйфекерҙәре менән уртаҡлашты. Уның һүҙҙәрен БР Президенты ла хупланы һәм йыйылыусыларҙы ихлас күңелдән башҡортса һәм русса сәләмләне.

"Беҙ, ойоштороусылар, ярыштар матур үтһен өсөн иң уңайлы шарттар тыуҙырырға тырыштыҡ - мөһабәт биатлон комплексыбыҙҙы яңырттыҡ, яҡшы спортсылар әҙерләнек, хатта матур һауа торошона ла заказ бирҙек", - тине Президент.

Телмәр дилбегәһен ҡулына алып, Сергей Кущенко "Башҡортостанлыларҙың танышлыҡтары күп, шуға ла улар яҡшы һауа торошон да үҙҙәре теләгәнсә һорап ала", - тип мәрәкәләне һәм чемпионатты асыҡ тип иғлан итте. Сараны ҡарарға килгән ҡала халҡы онотолмаҫ тәҫораттар менән ҡайтып китте. Алғараҡ китеп шуны әйтәйек: иртәгәһенә, ярыштар башланған көндә, улай уҡ күп тамашасы йыйылманы. Бының сәбәбе билдәле - халыҡ барыһы ла эштә булды. Шулай ҙа теләгән кеше чемпионатты Башҡортостан юлдаш телеканалынан тура эфирҙа ҡарау мөмкинлеген ҡулынан ысҡындырмағандыр. Донъяның 46 дәүләте зәңгәр экрандар аша Өфөнө күҙәтә бөгөн.

Ярыштар 20 сентябрь 10.50 сәғәттә үҫмерҙәр араһындағы ҡатнаш эстафета менән старт алды. Рәсәй, Украина, Чехия һәм Болгария данын яҡлаусы 16 йәш спортсы араһында Ольга Подчуфарова һәм Ольга Калина, шулай уҡ Алексей Корнев һәм яҡташыбыҙ Антон Бабиковтарҙы берләштергән Рәсәй йыйылма командаһы дәғүәселәрен әллә ҡайҙа ҡалдырып китте. Украина - 2-се, Чехия 3-сө урынға сыҡты. Өфө биатлонсыһы Антон Бабиковтың сығышын командалаш иптәштәре ыңғай баһаланы. Эстафетала ҡатнашыусыларҙың һәр ағзаһы мөһим роль уйнаһа ла, был команданың иң ауыр өлөшө - этапты йомғаҡлап ҡуйыу Өфө егете иңенә ышанып тапшырылғайны.

Әйткәндәй, был көндә өлкәндәр араһында уҙған ҡатнаш эстафетала данлыҡлы яҡташтарыбыҙ Максим Чудов менән Ольга Вилухиналарҙы үҙ эсенә алған зачеттан тыш команда ла ярайһы уҡ яҡшы һөҙөмтә күрһәтеп, икенсе килде. Ольга Вилухина беҙгә биргән интервьюһында командалаштарының иҫ киткес шәп сығыш яһауы өсөн ҡыуаныуын, тик үҙенең генә атҡан саҡта мәргәнлектә ҡалышыуын, шунлыҡтан эстафетаны дүртенсе булып тапшырыуы өсөн борсолоуын йәшермәне. Был командала сығышын да яҡташыбыҙ Чудов уңышлы йомғаҡланы. Өлкәндәр араһындағы ҡатнаш эстафетала тәүге урынды Слепцова, Зайцева, Волков һәм Шипулин союзы үҙ ҡулынан ысҡындырманы. Украиндар һәм чехтар тағы ла икенсе, өсөнсө урындарҙы бүлеште. Беҙҙең спортсы Шипулин иң артта килеүселәрҙе аҙаҡҡа ҡарай бер түңәрәккә артта ҡалдырып, тамашасыларға шоу бүләк итте. Әлбиттә, был ярышта мәргәнлектә кем отҡор, шул еңәсәк икәнен билдәләге килә.

Трасса үҙенсәлектәренә килгәндә, урындағы тренерҙар маршруттың яңы һәм уңайлы, ә спортсылар - ҡыҙыҡлы, хатта ауыр ғына булыуын билдәләне. Инглизсә яҡшы һөйләшкән чех биатлонсыһы Томаас Крупчик әйтеүенсә, уға Өфө биатлон комплексының матур урында урынлашыуы айырыуса оҡшаған. Трасса тураһында: "Бындай ауыр трассаларҙы бик һирәк осратҡанмындыр", - тиһә, үҙенең баҫып атыуында уңышҡа өлгәшеүе өсөн ҡыуанысын белдерҙе. Иртәнсәк Өфө ҡалаһының билдәле урындарын йөрөп сығыуы, ҡала панорамаһына һоҡланыуын да йылмайып һөйләне. Күп кенә рус телле спортсылар - Рәсәй һәм Украина командалары ағзалары билдәләүенсә, Өфөләге аяҙ күк, ел-ямғырһыҙ һауа ла, тамашасыларҙың бик ихлас, һәр кемдең уңышы һәм уңышһыҙлығы өсөн янып көйөүе - барыһы ла ыңғай тәьҫораттар ҡалдырған. Чемпионат дауам итә.

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Тамашасылар 22 сентябрь 11 сәғәттә спринт ярыштарын "Биатлон"ға барып ҡарай, йә булмаһа БСТ телеканалы, http://summerbiathlon.ru/ сайты аша мәғлүмәттәр менән таныша ала. Ә 23-өндә персьют, йәғни ҡыуышыу ярыштары көтөлә. Чемпионатты ябыу тантанаһы 23 сентябрь 20.30 сәғәттә Конгресс-Холл бинаһы янындағы майҙанда үтәсәк.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ әҙерләне.**

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ Башҡортостан баш ҡалаһында рәсми теркәлгән эшһеҙлек кимәле әлегә 1,3 процентҡа тиң. Көсөргәнешлек коэффициенты 0,43 тәшкил итә, тип хәбәр иттеләр Өфөнөң Халыҡ мәшғүллеге үҙәгенән. Әлеге ваҡытта баш ҡаланың вакансиялар банкында 18 меңдән ашыу буш эш урыны иҫәпләнә. Уларға 7300-ҙән ашыу рәсми рәүештә теркәлгән эшһеҙ дәғүә итә. Өфөнөң Халыҡ мәшғүллеге хеҙмәтендә йәмғеһе 7800 кеше иҫәптә тора. Әлеге көндә Өфөлә эшһеҙлек буйынса пособие 4062 һум тәшкил итә. Пособиеның максималь кимәле - 5635 һум, минималь кимәле - 977,5 һум. Шул уҡ ваҡытта баш ҡалала 1 августа уртаса эш хаҡы 21810,9 һумға еткән.

✓ Баш ҡаланың Дим районындағы Ухтомский, Дағстан һәм Магистраль урамдары менән сикләнгән территорияны планлаштырыу проекты буйынса йәмәғәт тыңлауҙары көн элгәре район мәктәптәренең береһендә үтте. Унда ҡала Советы депутаттары, ҡала һәм район хакимиәттәре вәкилдәре, проектлаусылар һәм микрорайонда йәшәүсе 170 кеше ҡатнашты. Тыңлауҙарҙа ҡатнашыусыларға тәҡдим ителгән проект кварталды комплекслы үҙләштереүҙе күҙ уңында тота. Унда 9-16 ҡатлы 15 яңы йорт төҙөү планлаштырыла. Кварталда яҡынса һигеҙ мең кеше йәшәйәсәк.

✓ Башҡортостанда иҫәптә торған транспорт саралары Волга буйы федераль округында теркәлгәндәрҙең дөйөм һанының 14 процентын тәшкил итә. Бындай мәғлүмәттәр менән Федераль һалым хеҙмәтенең БР буйынса идаралығы таныштыра. Шул уҡ ваҡытта иҫәпләнгән транспорт һалымы суммаһы буйынса республика округтың 14 субъекты араһында бишенсе урында тора. Идаралыҡта быны тәү сиратта бихисап ташламалар менән аңлаталар.

✓ VIII "Ҡала мөхите" социаль реклама фестиваленә эштәр ҡабул ителә. Уның быйылғы девизы - "Беҙгә ҡушыл!" Ойоштороусылар шулай тип өндәшеп, барлыҡ битараф булмаған ижадсыларҙы фестивалдә ҡатнашырға саҡыра. Фестивалдә, йылдағыса, Рәсәйҙең реклама өлкәһендәге билдәле белгестәре ҡатнашасаҡ, оҫталыҡ дәрестәре үтәкәрәсәк. Эштәр 1 ноябргә тиклем ҡабул ителә. Фестивалде ойоштороу комитетының телефоны: (347) 291-11-93 (94, 95).

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ХАЛЫҠҠА КЕМ ЯҠЫН

**Өфөлә Урындағы үҙидараны үҫтереү буйынса округ консультатив советының тәүге ултырышы үтте. Унда ҡатнашыусылар Рәсәй Президентының сәйәси системаны яңыртыу буйынса күрһәтмәләрен тормошҡа ашырыу сиктәрендә округ төбәктәрендә урындағы үҙидараны үҫтереү мәсьәләләрен тикшерҙе.**

Волга буйы федераль округының Урындағы үҙидараны үҫтереү буйынса советы 2012 йылдың июлендә булдырылды. Уның составына муниципалитет вәкилдәре, ҙур ҡала хакимиәттәре һәм административ үҙәктәр башлыҡтары, төбәк һәм төбәк-ара ассоциация һәм йәмәғәт структуралары етәкселәре, Федераль Йыйылыш вәкилдәре һәм эксперттар инде. Төбәк башлығы вазифаһына кандидаттарҙы яҡлауҙа депутаттарҙың ҡатнашлығы буйынса дәүләт власы органдары өсөн тәҡдимдәр әҙерләү, кадрҙар резервын формалаштырыу, төбәк һәм муниципаль власть органдары араһында вәкәләттәрҙе бүлеү Совет бурыстарына инә.

Ултырыштың эшендә Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабич, Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов, Волга буйы федераль округына ингән төбәк вәкилдәре ҡатнашты. "Төп власть - ул муниципаль власть. Был хаҡта мин һәр ваҡыт әйтәм, - тине Михаил Бабич, ултырышты асып. - Сөнки ул халыҡҡа яҡыныраҡ тора. Территорияларҙа барлыҡҡа килгән проблемалар һәм власть вертикале өсөн халыҡ алдында ул беренсе булып яуап бирә".

Михаил Бабич билдәләүенсә, бөгөнгө көндә урындағы үҙидара роле бермә-бер арта. Илдәге сәйәси реформа федераль закондар формаһын алды ла инде һәм 14 октябрҙә яңы закондар буйынса тәүге һайлау кампанияһы үтәсәк. Һайлау реформаһы шунан ғибәрәт: муниципаль берәмектәр төбәктәрҙә вәкәләтле һәм башҡарма власть вертикален формалаштырасаҡ звеноға әүерелә.

Михаил Бабич вәкәләттәрҙең бер өлөшөн төбәк һәм муниципаль кимәлдәргә бүлеп биреү мәсьәләһен тикшереү бөгөнгө ултырыштың төп бурыстарының береһе тип атаны. "Бүлеп бирелгән барлыҡ вәкәләттәр тейешле керем сығанаҡтары менән тәьмин ителгән булырға тейеш", - тине ул төп принциптарҙың береһе хаҡында.

Уның билдәләүенсә, муниципалитеттарҙың күпселек проблемалары уларҙы хәл итеү өсөн тейешле керем сығанаҡтарының булмауына бәйле. Ултырышта ҡатнашыусылар әлеге мәсьәлә буйынса аныҡ тәҡдимдәр әҙерләргә тейеш, сөнки Рәсәй Президенты ҡушыуы буйынса алдағы ике айҙа норматив акттар ҡабул ителәсәк һәм вәкәләттәрҙең бер өлөшө уларға беркетелгән керем сығанаҡтары менән ҡуша төбәктәргә бүлеп бирелә башлаясаҡ.

Башҡортостан исеменән БР Дәүләт Йыйылышының Урындағы үҙидара һәм йәмәғәт берекмәләре буйынса комитеты рәйесе Рөстәм Күзбәков, Октябрьский ҡалаһы хакимиәте башлығы, "БР Муниципаль берәмектәр советы" ассоциацияһы идараһы рәйесе Сергей Молчанов, Стәрлетамаҡ хакимиәте башлығы Алексей Изотов, Өфө ҡала Советы рәйесе Евгений Семивеличенко сығыш яһаны.

# ЮЛҒА ҺАЛЫУ КӘРӘК

**Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабич һәм Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Өфөлә, Республика йортонда Волга буйы федераль округы төбәктәре мосолмандарының Диниә назараттары вәкилдәре менән осрашты.**

Осрашыуҙа ислам дине буйынса белем биреү, ваххабизм таралыуына ҡаршы көрәш мәсьәләләре, шулай уҡ Татарстан Республикаһының тәжрибәһе тикшерелде. Осрашыуҙа ҡатнашыусылар теракт һөжүмтәһендә һәләк булған билдәле дин белгесе, Татарстан Республикаһы мосолмандарының Диниә назараты рәйесе урынбаҫары Вәлиулла Яҡуповты бер минут тын тороп иҫкә алды. Тераҡттан һуң унда сит илдә белем алыуға, ТР мосолмандарының Диниә назараты, мәсеттәр, имамдар менән үҙ-ара эш итеүгә, уларҙың эшен ойоштороуға ҡарата мөнәсәбәттәрҙе принципиаль үҙгәрткән бер нисә ҡарар ҡабул ителде. Михаил Бабич фекеренсә, Татарстандың тәжрибәһе Волга буйы федераль округы төбәктәрендә генә түгел, тотош илдә лә иғтибарға лайыҡ. Сөнки Рәсәй Федерацияһының күпселек төбәктәрендә Урта Азия республикаларынан сыҡҡан кешеләр һаны күбәйә, улар үҙҙәренең дини йолаларын һәм традицияларын көсләп таға башлай.

Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов осрашыуҙа ҡатнашыусыларға республикалағы конфессия-ара хәл тураһында һөйләне. Башҡортостанда 12 дини үҙәк, 1583 дини ойошма эшләй, тип билдәләне ул. Дини ойошмаларҙың 88 проценттан ашыуы - ислам (67 процент) һәм православие (21 процент) диндәренә ҡарай. Шул уҡ ваҡытта, Рөстәм Хәмитов билдәләүенсә, республикала имамдарҙы ислам дине ҡанундарына таянып әҙерләүгә баҫым яһала.

Осрашыуҙа ҡатнашыусылар дәүләт власы органдарының конфессиялар менән үҙ-ара килешеп эш итеүен камиллаштырыуға йүнәлтелгән конструктив тәҡдимдәр индерҙе. Осрашыу аҙағында Михаил Бабич билдәләүенсә, бюджеттан финансланған һәм ислам дине буйынса белем биреүгә йүнәлтелгән программаларҙың ни тиклем һөҙөмтәле эшләүен, был программаларға мәҙрәсә һәм ислам университеттарының ниндәй кимәлдә йәлеп ителгән булыуын асыҡлау өсөн киләһе бындай осрашыу Мәғариф министрлығы, дәүләт юғары уҡыу йорттары вәкилдәре менән үтәсәк.

# ҠАРТТАР ҘА МОХТАЖ

**Өфөлә өлкән йәштәге кешеләргә арналған халыҡ-ара форум булып үтте. "Нефтсе" мәҙәниәт һарайында үткәрелгән "50 ПЛЮС. Өлкән йәштең ыңғай яҡтары" халыҡ-ара конференцияһында сәйәсмәндәр, ғалимдар, иҡтисадсылар, йәмәғәт эшмәкәрҙәре ҡатнашты.**

Конференцияла ҡатнашыусыларҙы сәләмләп, Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов был мөһим проекттың былтыр Рәсәйҙең Федерация Советы ярҙамы менән башланған социаль инициативаның бер өлөшө булып тороуын билдәләне.

- Форумдың тап беҙҙә - Башҡортостанда үткәрелеүе ҡыуаныслы. Әлеге осрашыу донъяуи тәжрибә, был өлкәләге заманса фәнни эшләнмәләр менән танышырға мөмкинлек бирә, - тине Рөстәм Хәмитов. - Беҙ, йәш быуын айырыуса яҡлауға һәм иғтибарға мохтаж, тип уйлап өйрәнгәнбеҙ һәм был дөрөҫ, сөнки йәштәрҙе тәрбиәләргә, уҡытырға кәрәк һәм беҙ ваҡытыбыҙҙың күпселек өлөшөн шуға бағышлайбыҙ. Рәсәй Федерацияһы субъекттары бюджеттарын алып ҡарағанда, нигеҙҙә улар йәштәрҙе уҡытыуға, уларға ярҙам итеүгә йүнәлтелгән. Әммә йыш ҡына үҙҙәренең физиҡәр хеҙмәте менән илебеҙҙе үҫтергән кешеләр хаҡында онотабыҙ. Өлкән йәштәге кешеләр йыш ҡына ситләтелә, йәки улар үҙҙәренең эш даирәһен таба алмай. Тормошта үҙ урынын эҙләүҙе дауам иткән, йылдар дауамында тупланған тәжрибәһе менән бүлешергә теләгән өлкән йәштәге кешеләр өсөн бындай конференциялар ярҙам итергә тейеш.

Билдәләнеүенсә, ололар үҙҙәрен ышаныслы һәм тыныс тойһон өсөн республикала күп эштәр башҡарыла. Беҙҙә кешеләргә уҡырға, сәйәхәт итергә, үҙҙәре өҫтөндә эшләргә, алға табан барырға ярҙам иткән программалар бар. Миҫалға, былтыр тормошҡа ашырыла башлаған социаль туризм буйынса программаны килтерергә була. Был программа менән 5 меңгә яҡын кеше файҙаланған. Өсөнсө быуын университеттары ла шулай уҡ мөһим сараларҙың береһе булып тора. Бөгөн бөтә республика буйлап уларҙа тиҫтәләгән мең кеше уҡый. Шулай уҡ әлеге ваҡытта төбәктә Башҡорт электрон университеты булдырыу буйынса эш бара. Был хаҡта, йәғни Башҡортостанда оло йәштәге кешеләрҙең ихтыяжын ҡәнәғәтләнедереү буйынса реаль эштәр башҡарылыуы тураһында Федераль Йыйылыштың Федерация Советы рәйесе урынбаҫары Светлана Орлова ла билдәләп китте.

"Башинформ" материалдарынан.

ҺОРАУ - ЯУАП

# ӨЙӨҢ ЙЫЛЫ БУЛҺЫН, ТИҺӘҢ...

**Киленем бәпес алып ҡайтты, ейәнемә бер ай ҙа юҡ әле. Көндәр бер һыуыта, бер йылыта, ә фатирҙа барыбер һыуыҡ - бәпес сирләп китмәһен тип борсолам. Йорттарға ҡасандан йылы бирә башларҙар икән?**

- Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов баш ҡалабыҙҙа йылытыу сезонын башлау тураһында ҡарарға 17 сентябрҙә үк ҡул ҡуйҙы. Коммуналь хеҙмәттәрҙе көйләү буйынса федераль законға ярашлы, тыштағы уртаса тәүлек һауа температураһы биш көн рәттән Цельсий буйынса +8 градустан түбәнерәк күрһәткән осраҡта йорттарға йылы бирелә башлаясаҡ. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ҡала халҡының йәшәү шарттарын сифатлыраҡ итеү маҡсатынан сығып, Өфөлә һауа температураһының билдәләнгән кимәлгә төшөүен көтөп тормаҫтан, йорттарға ваҡытынан алда йылы бирергә ҡарар ителде. Өфө хакимиәте башлығы әлеге ҡарарында "Өфө инженер селтәрҙәре" предприятиеһы, "Башкирэнерго" акционерҙар йәмғиәте, йылылыҡ менән тәьмин итеүсе предприятиелар етәкселәренә йылылыҡ биреүҙе ҡулланыусылар ғаризаһына ярашлы хәл итеү бурысын йөкмәтте. Ошоға ярашлы, хат авторына үҙегеҙ йәшәгән йорт советы менән берлектә идарасы компанияһыҙға ғариза биреү кәрәклеген белдерәбеҙ. Шуныһын да иҫтә тотоғоҙ: йылылыҡ ваҡытынан алдараҡ бирелгән осраҡта уның өсөн түләүҙе лә башҡаларҙан алдараҡ башларға тейеш булаһығыҙ. Коллектив ғариза бирелгән осраҡта йортоғоҙға йылылыҡ килеүен бер нисә көн көтөргә кәрәклеген дә иҫтән сығармаһағыҙ ине, сөнки фатирҙағы йылылыҡ радиаторҙары йылынып, ныҡлы режимда эшләй башлағанса, бер аҙ көтөргә тура киләсәк. Йылылыҡ сезонын ваҡытынан иртәрәк башлап ебәреү, шулай итеп, ҡалаға ысын һыуыҡтар килеп еткәнсе, йорттарҙы уңайлы температураға көйләргә мөмкинлек бирәсәк.

# МИРАҪМЫ, БҮЛӘКМЕ?

**"Улым эсеп килә лә аҡса таптыра, ә ҡыҙым мине ҡарай, шуға күрә лә үҙ ҡарамағымдағы бөтә милкемде уға ҡалдырырға уйлайым. Был мөмкинме?"**

- Һәр бер граждан васыят яҙып, сәбәптәрен аңлатып тормаҫтан, закон буйынса вариҫтарын мираҫтан мәхрүм итә ала. Ләкин шул уҡ ваҡытта закон тарафынан бәлиғ булмаған һәм эшкә һәләтһеҙ балаларҙың мираҫтағы мотлаҡ өлөшө гарантиялана. Һеҙҙең улығыҙ ҡартлыҡ буйынса пенсионер (ә, бәлки, инвалид ) булараҡ, тап бына ошо категорияға ҡарай ҙа инде. Бындай кешеләр закон буйынса үҙенә тейеш өлөштөң кәм тигәндә яртыһына дәғүә итә. Ә шулай ҙа милкегеҙ буйынса мәсьәләне һеҙ әле үк хәл итә алаһығыҙ. Бының ике төрлө юлы бар. Беренсеһе - рента килешеүе, йәғни ғүмерлеккә кемдеңдер аҫырауында булыу. Икенсеһе - ҡыҙығыҙға бөтә булған мөлкәтегеҙҙе тотошлай бүләк итеү. Рента килешеүе ике мәсьәләне хәл итеү мөмкинлеген бирә: милеккә хужа булыу хоҡуғы ҡыҙығыҙға күсә, ә һеҙгә ғүмерегеҙҙең ахырынаса уның ҡарауында булыу гарантиялана. Закон тарафынан аҫырауҙың айлыҡ күләме билдәләнгән: милектең ҡайһы федерация субъектында булыуына ҡарап, ул ике йәшәү минимумынан да кәм түгел.

Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



### Йәрәхәттәрҙе дауалау

❖ Йәрәхәттән ҡан ағыу һәм эренләүҙән һаҡлау өсөн 1 ҡалаҡ меңъяпраҡ япрағын 1 стакан ҡайнар һыуҙа көслә утта 15-20 минут ҡайнатырға, һөҙөргә һәм мамыҡ менән йәрәхәткә һөртөргә.

❖ Алоэ япрағын ярып, еүеш яғы менән тәндең киҫелгән еренә ябырға һәм бәйләп ҡуйырға. 5-6 сәғәттән тән яраһы төҙәлә башлай.

❖ Йәрәхәт оҙаҡ төҙәлмәһә, кәзә йәки һарыҡ майын (бер ҡалаҡ), ярты ҡалаҡ тоҙ, 1 ҡалаҡ ваҡлап туралған һуғанды бер һауытҡа һалып, ныҡ итеп төйәһең. Шул ҡатнашманы йәрәхәткә һөртөп, бәйләйһең. Бер тәүлектән һуң алыштыраһың. Яра төҙәлгәнсе ҡабатларға.

❖ Ҡара икмәкте шәкәр менән болғатып, дегәнәк япрағы менән йәрәхәтле урынға ябып бәйләргә.

### Йөрәк ауыртһа

Һул күкрәктә аҡ шыршы (пихта) майы менән ышҡырға була. Ауыртыу баҫылғансы 3-5 минут ышҡырға.

### Күҙ ауыртһа

Күҙҙәрең ҡом төшкәндәге кеүек ауыртһа, бер баш һуғанды 2 стакан һыуҙа ҡайнатып бешерергә һәм шуға ярты балғалаҡ бал ҡушырға. Шул төнәтмә менән күҙҙе көнөнә 5 мәртәбә йыуырға.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

### Веналарҙың варикоз киңәйеүе

❖ 0,5 литр 9 процентлы һеркәгә һаҙанаҡ (багульник) тамыры һалырға һәм 3-4 көн төнәтергә. Ошо төнәтмәне тәндең варикозлы өлөштәренә һөртөргә. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: бактериялар өсөн беҙҙең тиребеҙ һыу өсөн балыҡ ауы кеүек, шуға ла һеркә менән уны эшкәртеп тороу файҙалы. Әммә был ғына етмәй әле. Дингеҙ кәбеҫтәһе, үгәй инә үләне, календула кеүек тоҙло үҫемлектәр ашау ҙа кәрәк. Әгәр ҙә 3-4 ай дауамында көн һайын 3 тапҡыр ашағандан һуң бер сәғәт үткәс диңгеҙ кәбеҫтәһе ҡабул итһәң, ҡан тамырҙары яҡшырасаҡ.

Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.

## ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...

**Тормош уйламағанда сюрприз һап ҡуя. Әммә уны күреп ҡалыуың, эләктереп алыуың, хәтереңә һалып ҡуйып, кәрәк ваҡытта ҡабат һөйрәп сығарыуың ғына шарт. Ғөмүмән, бөгөнгө әңгәмәсебеҙ үҙе лә "сюрприз-кеше". Ул, ниндәй генә тема булмаһын, һин уйламаған версияны килтереп сығарып, үҙенең дәлилдәре менән ныҡлап ҡуя ла, уйҙарға һалып сығып китә. Шуныһы ҡыҙыҡлы - заманында оҙаҡ йылдар хоҡуҡ һаҡлау органдарында эшләгәнгәме, бөгөнгө тормошо фән менән бәйле булһа ла, ул ғилми тикшеренеүҙәрен һәр ваҡыт ныҡлап тикшерелгән факттар менән төплө нигеҙләп бара һәм ҡайны бер ваҡыт уға ҡаршы ҡуйырлыҡ дәлил дә булмай сыға. Бөгөн редакциябыҙ ҡунағы, бер үк ваҡытта даими авторыбыҙ - Башҡортостан Фәндәр академияһы Гуманитар тикшеренеүҙәр институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре, философия фәндәре кандидаты Зәкирйән ӘМИНЕВ менән башҡорттарҙың боронғо ата-бабаларының эҙен эҙләп Молдова яҡтарына сәйәхәт итәсәкбеҙ.**

# МОЛДОВА БАШҠОРТТАРЫ



### Ысын башҡорттар ниндәй?

1985 йылда Сибай ҡала дауаханаһында дауаланырға тура килде. Бер нисә көндән минең палатаға ҡалаға Молдованан командировкаға килгән һәм, бәхетһеҙлегенә күрә, ҡапыл сирләп киткән бер ирҙе һалдылар. Молдованың мәжбүри ҡунағының ҡалала бер кеме лә юҡлығын иҫәпкә алып, мин уға һәр төрлө ярҙам итергә тырыштым. Дауахананың тар палатаһында ваҡытыбыҙҙы гәп ҡороп ҡыҫҡарта инек. Минең молдован күршем күрҙән булып сыкты һәм тиҙ арала уртаҡ тел таптыҡ. Һүҙ артынан һүҙ сығып, ул башҡорттарҙы яҡшы белеүен, башҡорттар араһында бик күп дуҫтары булыуын әйтеп һалды. Советтар заманы булғас, күп башҡорттар тыуған республикаһынан сикһеҙ киң илдең төрлө төҙөлөштәренә эшкә китә ине. Шуға уның һүҙҙәренә артыҡ әһәмиәт бирмәнем. Бары тик СССР-ҙың ниндәй төҙөлөшөндә башҡорттар менән дуҫлашыуын ғына һораным. Уның яуабы мине аптыраушта ҡалдырҙы. Ул башҡорт дуҫтарының Молдавия кешеләре булыуын, унда башҡорттарҙың боронан йәшәүен һәм бик күп булыуын белдерҙе. Һүҙ ыңғайы Сибай башҡорттарының мосолман динле икәнлегенә аптыраны. Молдова башҡорттары барыһы ла католиктар, тине ул. Хатта, урындағы башҡорттар, католик булмағас, ысын башҡорттар түгел, тигән мәғәнә лә һалды тел төбөнә. Минең "Ә ул башҡорт дуҫтарың венгр түгелдәрме?" тигән һорауыма, бер ни тиклем үпкәләберәк "Мин венгрҙы башҡорттан ғына айырам инде, беҙҙә башҡорттарҙан ныҡ айырылып торған венгрҙәр ҙа йәшәй", тине. Молдавия ҡунағының мәғлүмәте мине бик ҡыҙыҡһындырҙы, әммә уның тарихтан алыҫ булыуы, был башҡорттар Молдавияға ҡасан һәм нисек барып эләккән, тигән һорауымды асыҡ ҡалдырҙы. Бәлки, дауахана палатаһындағы күршемдең был мәғлүмәте экзотик мәғлүмәт кенә булып ҡалыр ине, уны ҡабат иҫкә төшөрөргә икенсе ваҡиға ярҙам итте.

### Измаилды кем алған... йәки унда борон кемдәр йәшәгән?

1991 йылда эш буйынса Салауат ҡалаһында командировкала булдым һәм кискеһен ҡунаҡханала ваҡытты үткәрергә тип, вокзал эргәһендәге киоскынан "Кодры. Молдова литературная" (№7, 1991 йыл) журналын һатып алдым. Ундағы бер мәғлүмәт ҡасандыр Сибай дауаханаһында алыҫ Молдавия ҡунағынан уның башҡорт дуҫтары тураһында ишеткән хәбәрҙе ҡабат хәтергә төшөрҙө. Журналда боронғо молдова риүәйәте - "Сихырсы ҡыҙы" ("Дочь колдуньи") баҫылғайны. Ул шулай тип башлана: "Был бик алыҫ ваҡыттарҙа була. Хәҙерге Измаил һәм Аккерман өйәҙҙәренең далаларында әле бер кем йәшәмәгән замандарҙа, татарҙар (нуғайҙар - **З. Ә.**), башҡорттар менән сиғандар ғына иркен күсенеп йөрөгән. Унда-бында, һирәк-мирәк кенә, бер-береһенән бик алыҫта тәрәктәр ҡул аҫтындағы молдовандар менән урыҫтарҙың (старообрядтар, молокандар, ҡасып йөрөүсе крәҫтиәндәр һ.б.) ҙур булмаған ауылдары осраштырғылаған". Молдова яҙыусыһы Савва Пынзаруҙың бәләкәй генә баш һүҙенән күренеүенсә, был риүәйәт 1891 йылда Ольга Накко тарафынан "Бессарабский вестник" гәзитендә донъя күрә.

Одесса ҡалаһында тыуған Ольга Накко, Молдавиялағы Бессарабияның Ниспоренск районы Баланешты ауылының алпауыты, "Бессарабия тарихы боронғо дәүерҙәрҙән алып" тигән китаптың авторы һәм "Бессарабия губерна ведомостары" гәзите мөхәррире Алексей Константинович Наккоға тормошҡа сығып (1832 - 1915), Бессарабияла йәшәй башлай, һәм тиҙ арала молдаванса һөйләшергә өйрәнеп, урындағы халыҡтың тормош-көнкүреше менән ихлас ҡыҙыҡһынып, уларҙы үҙ әҫәрҙәрендә сағыу, матур итеп сағылдыра. Атап кителгән риүәйәттән тыш, Ольга Накко үҙ заманында башҡа бик күп әҫәрҙәрҙең авторы булараҡ та танылыу ала. Билдәле Бессарабия тарихсыһының ҡатыны булараҡ, Ольга Накко башҡорттар тураһында, моғайын да, ярайһы ғына мәғлүмәтле булған һәм "Сихырсы ҡыҙы" риүәйәтенә башҡорттар осраҡлы ғына барып инмәгәндер, тиергә мөмкин.

Шулай итеп, мин дауахана палатаһындағы молдован күршемдең бер нәмәне лә бутамағанлығын һәм Молдавия башҡорттары тураһында аҙмы-күпме мәғлүмәтле булғанлығын аңланым. Әммә дауахана палатаһындағы информаторҙың һәм бер риүәйәттәге ҡыҫҡа ғына мәғлүмәттәр "Ниндәй сәбәптәр һәм ҡасан ул башҡорттарҙы, Көньяҡ Уралда йәшәгән төп массанан айырылып, алыҫта ятҡан (ер аяғы - ер башы!) Молдавияға барып сығырға мәжбүр итте икән?" - тигән һорауға яуап бирмәй ине әле.

Минеңсә, бында һүҙ Венгрияға бәшәнәктәр менән бергә барып эләккән башҡорттар тураһында барырға тейеш. Әлегә, үкенескә күрә, "Венгриялағы башҡорттар" темаһы тикшеренеүселәрҙең иғтибарынан ситтә ҡала килә. Венгриялағы тәрҡиҙәр тураһында һөйләгәндә, гәҙәттә, бәшәнәктәрҙе генә телгә алалар, әммә беҙҙең халыҡ тураһында никтер онотолар. Ә бит көнсығыш авторҙары бәшәнәктәрҙе телгә алғанда улар менән бергә даими рәүештә башҡорттарҙы ла бергә күрһәткән һәм уларҙы төрки сығышлы һәм туғандаштар, тип атаған. Бындай берлектәге йәшәү рәүеше бер нисә быуат дауам иткән. IX быуаттың икенсе яртыһынан - XII быуаттың беренсе яртыһындағы башҡорт тарихын бәшәнәктәрҙе иҫәпкә алмайынса өйрәнеү мөмкин түгел. Шуға күрә, тимәк, беҙ Венгрияла төрки ҡәүемдәр тураһында һүҙ алып барғанда, бәшәнәктәр менән бергә башҡорттарҙы ла күҙ уңында тоторға тейешбеҙ. Башҡорттарҙың Венгрияла булыуҙары, мадьяр тарихында үҙҙәренең сағыу эҙҙәрен ҡалдырыуы тураһында Урта быуат сығанаҡтарында ярайһы ғына мәғлүмәттәр һаҡланып ҡалғанлығы мәғлүм.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**
**(Дауамы бар).**

## БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



# 1812 ЙЫЛҒЫ ВАТАН ҺУҒЫШЫНЫҢ... орден кавалерҙары

**Ихсан Әбүбәкеров** - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Есаул. Ырымбур губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙе Сәнкем-Ҡыпсаҡ олоҫоноң Үргә Таш ауылынан (хәҙерге Мәләүез районы). 1-се Башҡорт полкы составында 1812 йылда - Гродно, Молевое Болото, 1813 йылда Можайск, Малоярославец ҡалалары өсөн алыштарҙа, Данциг блокадаһында, Берлинды азат итеүҙә, Люксембург, Дрезден өсөн алыштарҙа, Лейпциг һуғышында, 1814 йылда Леон алышында, Парижды алыуҙа ҡатнаша һәм 1814 йылдың 1 мартында 1-се Башҡорт полкының полк командиры итеп тәғәйенләнә. Бигерәк тә "Смоленск ҡалаһы эргәһендә айырыуса батырлыҡ күрһәтә һәм ҡаһарманлығы өсөн полк есаулы итеп үрләтелә һәм 1813-сө йылдың 3 мартында наградлана; ... Агданск ҡалаһы эргәһендә 1813-сө йылдың 13 ғинуарында күрһәткән ҡаһарманлығы өсөн тәрегә тәҡдим ителә, 1813-сө йылдың 6 декабрендә юғары бойороҡ менән наградлана һәм Дюссельдорф ҡалаһы эргәһендә өсөнсө дәрәжә Изге Анна орденын һәм ҡылыс ала; ...Десавой ҡалаһы эргәһендә - 16 сентябрҙә дүртенсе дәрәжә Владимир тәреһенә тәҡдим ителә һәм 1814 йылда Бреда ҡәлғәһе эргәһендә наградлана..." 1830 йылдарҙа Үргә Таш ауылында йәшәй. 4-се дәрәжә Изге Владимир ордены (1814), 3-сө дәрәжә Изге Анна ордены (1813), "1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлеге", "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" миҙалдары менән наградланған.

**Ишбирҙе Ишкинин** - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Тархан. Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙе Үҫәргән олоҫоноң Аҡъюл ауылынан (хәҙерге Хәйбулла районы). 1-се Башҡорт полкы составында Рәсәй империяһы, Саксония, Пруссия, Голландия, Франция территорияларындағы хәрби операцияларҙа ҡатнаша. Изге Георгий Хәрби орденының отличие билдәһенә лайыҡ була. "1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлеге", "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" миҙалдары менән наградланған.

**Ҡаһарман Ҡыуатов** - (1787-1828 йылдар), Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙе Үҫәргән олоҫо Буранғол ауылынан (хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ районы), кантон начальнигы, поручик. 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Ҡыуатовтар токомонан. 1817 - 1828 йылдарҙа 9-сы башҡорт кантоны начальнигы. Ҡаһарман Ҡыуатов инициативаһы буйынса башҡорт балалары Санкт-Петербургҡа, Мәскәүгә, Ҡаҙанға һәм Рәсәйҙең башҡа ҡалаларына белем алырға һәм кәсепкә өйрәнергә ебәрелә. "Ҡаһарман кантон" тигән башҡорт халыҡ йыры уға бағышланған.

**Ҡунафия Ҡотлогилдин** - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙенең Иманғол ауылынан (хәҙерге Ырымбур өлкәһе Октябрь районының 1-се Иманғол ауылы). 1-се Башҡорт полкы составында Рәсәй империяһы, Саксония, Пруссия, Голландия һәм Франция территорияларындағы хәрби операцияларҙа ҡатнаша. Изге Георгий Хәрби орденының отличие билдәһе, "1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлеге", "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" миҙалдары менән наградланған.

**Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Судьялар ҙа, рефери ҙа барыбер тауышын үҙ ватандаштары файҙаһына бирә, һәр кем үҙ спортсыһын яҡлай. Шуға күрә, ситтә көс һынашҡан саҡта нокаутҡа ғына оҙатып өлгөрмәһәң, мәрәйҙәр буйынса еңеүең бик икеле.*



# АУЫРЛЫҠТАР ул көслөнө сыныҡтыра,

**Донъяның иң көслө ун боксеры исемлегенә ингән милләттәшебеҙҙе беләһегеҙме? Профиҙар уны үҙ-ара "дыуамал рәсәйле" тип тә атап йөрөтә. Эйе, фотонан да күреп таныйһығыҙҙыр: беҙҙең күптәнге геройыбыҙ Хәбир Сөләймәнов булыр ул. Был егеттең үҙенә ике тамсы һыу кеүек оҡшаш игеҙәге лә бар, ул да һәүәҫкәр бокс оҫтаһы, Хәбир менән Нью-Йорк рингтарын дер һелкеткән Сабир булыр. Тыумыштары буйынса егеттәр Силәбе өлкәһе Арғаяш районынан. Сабир АҠШ-та өс йыл йәшәп ҡайты, Хәбир инде һигеҙенсе йыл ошо ил ризығын ейә. Чемпиондар ошо көндәрҙә Өфөгә килеп, төрлө осрашыуҙарҙа ҡатнашты, киң мәғлүмәт саралары журналистарына интервьюлар бирҙе. Беҙ ҙә ҡунаҡ күрҙек: егеттәрҙе редакциябыҙға саҡырҙыҡ. Әңгәмәбеҙ талғын ғына аҡҡан дала йылғаһын да хәтерләтте, даръя ташҡынындай ҡубарып та киткеләне. Геройҙарыбыҙҙың тышҡы серлелеген һәм эске ябайлығын һөйләшеү барышында һеҙ ҙә төҫмөрләрһегеҙ, моғайын.**

**▸ Ниндәй генә еңеү булмаһын, ул еңеү үҙеңдән башлана. Әгәр һин мин-минлегеңде, ялҡаулығыңды еңә алмаһаң, еңеүгә өлгәшә алмайһың - был тормош ҡануны. Ә бына һеҙҙең үҙ-үҙегеҙҙе еңеүегеҙ нисек башланды?**

**Хәбир:** Тыуған ауылыбыҙҙа башланғыс мәктәп кенә бар ине. Урта мәктәпкә күрше ауылға йөрөп белем алыуыбыҙҙы иң тәүге еңеүебеҙ, тип әйтә алам. Аҙнаһына ике-өс тапҡыр 8 саҡрым алыҫлыҡта ятҡан күрше Дәрүиш ауыл мәктәбенә йәйәүләп йөрөргә тура килде. Шул ваҡытта ауылдаштарҙың бәғзеләре "Һеҙ ғалим йә мулла булырға итәһегеҙме?" тип көлә торғайны. Теләк ҙур булғас, кеше фекеренә иғтибар итмәйенсә, шулай күрше ауылға йөрөп белем алдыҡ.

**Сабир:** Бәләкәй саҡтан бокс менән шөғөлләнергә тигән хыялыбыҙ ҙа бар ине. Телевизорҙан ҡарап, билдәле Мексика ринг арыҫландарының исемдәрен ятлап бөткәйнек. Ә ниндәйҙер 6-10 йылдан тап ошо әзмәүерҙәргә ҡаршы һуғышып йөрөрбөҙ тип һис тә уйламай инек әле ул ваҡытта. Тормошобоҙҙо үҙгәртеп ебәргән һөйләшеү Силәбе дәүләт аграр-инженерлыҡ университетын тамамлаған көндө булды. Алған һөнәребеҙ әллә ни күңелгә ятмаған кеүек. Унын ҡарауы, мәктәп йылдарынан үк секцияла шөғөлләнгән кикбоксинг ылыҡтыра. Ни тиһәң дә, был спорт төрө буйынса "Рәсәй Федерацияһының спорт мастеры" тигән исемде яулағайныҡ, Рәсәй Кубогы чемпионы исемдәренә лайыҡ булғайныҡ бит. 2004 йылда кикбоксинг буйынса Америкала үткән донъя чемпионатында ҡатнашып, Хәбир - донъя чемпионы, мин - донъя чемпионаты призеры булғайныҡ. Шулай итеп, университетты тамамлаған көндө Хәбир менән үҙ-ара һөйләшәбеҙ: "Артабан нимә эшләргә, һөнәребеҙ буйынса эшкә урынлашайыҡ та , тыныс ҡына эшләй башлайыҡмы? Ә матур тормош тураһындағы хыялдарҙы ташлап ҡуйырғамы инде?.." Шул саҡ яҙмышыбыҙҙы тимер аҡса ырғытып, хәл итергә булдыҡ. Тәңкә ырғытыр алдынан "Рәсәйҙә ҡалабыҙмы, әллә АҠШ-ка осабыҙмы?" тигән һорау ҡуйҙыҡ. Икенсе вариант өҫкә сыҡты ла ҡуйҙы.

**▸ Америкаға тота килеп сығып китер өсөн аҙмы-күпме аҡса, ниндәйҙер саҡырыу, тәғәйен эш урыны, башҡа шарттар булырға тейеш, тигән ҡанунды белгәнһегеҙҙер бит инде?**

**Хәбир:** Ундай ҡанундарҙың тап һинең өсөн эшләй башлағанын көтһәң, үҙ-үҙеңә икеле-микеле һорауҙар ҡуя башлаһаң, маҡсатыңа, хыялыңа барып етеүҙәре, ай-һай, оҙаҡ буласаҡ, хатта ҡайһы бер мәлдә ошондай тәүәккәл аҙымдар эшләмәһәң, нимәгәлер өлгәшеү мөмкин дә түгел.

**Сабир:** Беҙҙең аҡсабыҙ самолет менән АҠШ-ка барып етерлек кенә ине, әммә аптырап торманыҡ - кем әйтмешләй, баш һау булһа, мал табыла ул ҡайҙа ла. АҠШ-ка барып төшкәндә кеҫәләрҙә ел уйнай - миндә 20, ә Хәбирҙә 30 доллар ғына аҡса бар ине. Хәбир миңә ҡараны ла: "Күпер аҫтында төнәйекме, әллә парҡка киттекме?" - тип көлә. Кешенең күңелендә хыялы, маҡсаты булһа, кеҫә таҡырлығы ҡамасау түгел. "Капуцино булвары кешеһе" фильмын ҡараған булһағыҙ, хәтерегеҙҙәлер, төп герой Библия ҡосаҡлап ултыра һәм шулай һөйләнә: "Кешенең миссияһы бар икән, уға бер ни ҙә ҡурҡыныс түгел..."

**▸ Бындай тәүәккәллек ҡайҙан килә һеҙҙә? Туғандарығыҙ араһында һеҙҙең кеүек тәүәккәл кешеләр бармы?**

**Сабир:** Атайыбыҙ ҙа, беҙҙең һымаҡ, алдына алғанын ҡуймай торған, тәүәккәл һәм дыуамал кеше. Дөрөҫөрәге, беҙ уға оҡшағанбыҙ. Советтар Союзы тарҡалғандан һуң, 1991 йылда, Рәсәй баҙар иҡтисады йүнәлешенә табан юл борҙо һәм атайыбыҙ ҙа, ирекле булғым килә, тип, фермерлыҡ менән шөғөлләнергә ҡарар итте. Шулай итеп, атайым менән инәйем Илембәт һәм Дәрүиш ауылдары араһында күл янына өй һалып, кәртә-ҡура төҙөп, бер баш һыйырҙарын эйәртеп, иркенгә күсеп сыҡтылар. Хәҙер ул урында бер түгел, өс өйө бар атайымдарҙың, 25 баш һыйыры, ике йөҙләп баш һарығы йөрөп ята. Электр линияһын да атай үҙе үткәрҙе. Әйткәндәй, был урынға 2008 йылда утар статусы һәм "Марат утары" тигән исем бирелде. Шулай итеп, азат, ирекле йәшәйем, тигән хыялы тормошҡа ашты атайыбыҙҙың.

**▸ Был һорау күптән йәшәй, уны беҙ һеҙҙең яҡташығыҙ Эльбрус Ниғмәтуллинға ла биргәнебеҙ булды. Һеҙҙең фекерҙе лә ишетке килә. Бына беҙ, Башҡортостанда йәшәгән башҡорттар, барыбер ҙә ниндәйҙер кимәлдә дәүләт механизмдарына арҡалана, таяна, уларға өмөт итә алабыҙ. Әйтәйек, милли мәктәп, мөхит, башҡа төрлө саралар бар. Ә Силәбе өлкәһендә йәшәгән башҡорттар ундай дәүләт механизмдарынан мәхрүм булғас, улар үҙ көсөнә ышанып, нимәгәлер өлгәшә, шуғалырмы, һеҙҙең арала эшҡыуарҙар, спортсылар, ғөмүмән, уңышлы кешеләр Башҡортостандағыға ҡарағанда күберәк һымаҡ. Бигерәк тә был спортҡа ҡағыла. Эльбрус Ниғмәтуллинды, Йосоповтар династияһын, Денис Шафиҡовты иҫкә төшөрһәк, ирекһеҙҙән, шундай һорау тыуа. Дәүләт ҡурсалауы барыбер ҙә кешене ойота, әҙергә-бәҙер өйрәтә, башҡаларға һалындыра. Һеҙ үҙегеҙҙең көсөгөҙгә ышанып ҡына нимәгәлер өлгәшә алғанһығыҙ. Ошо айырмаларға иғтибар иткәнегеҙ бармы?**

**Сабир:** Шундай мәҡәл бар: беҙҙе үлтермәгән бар нәмә лә беҙҙе көслөрәк итә. Был мәҡәлде кем әйткәндер, мин уны Хәбирҙән ишеттем. Ысынлап та, кешене ҡайҙа ғына алып барып ташлама - Израилгәме, Африкағамы, бүтән ергәме - уның йөрәгендә көс бар икән, барлыҡ ауырлыҡтарҙы ла еңеп сығасаҡ. Ауырлыҡтар көслө кешене сыныҡтыра, ә көсһөҙҙө - һындыра. Рәсәйҙә баҙар мөнәсәбәттәре индерелә башлағас, ҡайһылайтып килештереп әйтергә, көслөрәк кешеләр ошо шарттарға ҡулайлаша алды. Америкала - шул уҡ хәл. Рәсәй һәм Америка ошо тәңгәлдә оҡшаштар. Ә бына Башҡортостандағы әле һеҙ әйткән дәүләт тарафынан ҡурсалау, ысынлап та, кешеләрҙе ойота, тотҡарлай. Ә беҙҙә, Силәбелә, ундай ҡурсалауҙар булмағас, кешенең үҙенә ҡыбырҙарға тура килә. Христиан динендә сабый баланы һыуыҡ һыуҙа йөҙҙөрөү күренеше бар. Кеше тыуа ла, шунда уҡ ниндәйҙер шарттар алдына ҡуйыла. Беҙҙе,Башҡортостандан ситтә йәшәп ятҡан башҡорттарҙы ла, Хоҙай шундай шаңҡыта торған шарттар алдына ҡуя бик йыш һәм беҙ уны еңеп сығырға тейешбеҙ.

**▸ Һеҙгә тағы бер һорау. Беҙҙең халыҡ психологияһында, кешенең йөҙөнән алма, тигән һүҙ бар. Ҡолаҡ төбөнә тондороу тигән нәмә булған, әммә биткә һуғыу тыйылған. Кешенең йөҙөнән алма, тигән тыйыу әле лә бар беҙҙә. Бокста ошо сикте башҡорт кешеһе булараҡ нисек аша атланығыҙ, ғөмүмән, дәғүәсегә ниндәй ҡараштаһеҙ?**

**Сабир:** Мин бокста һәүәҫкәр булараҡ ҡына төртөштөм һәм мәрәй өсөн генә ярыша инем. Хәбирҙең яуабы һорауҙы ҡәнәғәтләндерер, моғайын, сөнки ул профессионал, уның спортында мәрәй йыйыу түгел, ә дәғүәсенде "үлтереү" - иң төп маҡсат.

**Хәбир:** Эйе, Сабир дөрөҫ әйтә. Профессионалдар араһында һуғыша башлағас, минең алға еңеүеңмәү мәсьәләһе генә түгел, хатта ки, тере ҡалыу-ҡалмау ҡурҡынысы ла килеп баҫты. Күҙ алдығыҙға килтерегеҙ әле: бар көсөнә һуғып, дәғүәсеһенә мөмкин тиклем күберәк зыян килтерергә өйрәтелгән кешегә ҡаршы сыҡҡан саҡта уны йәлләргә мөмкинме икән? Иртәме, һуңмы, профессиональ спортсы аяуһыҙ спортсыға әүерелә барыбер. Нисек тә тере ҡалырға - ошо хис уны алға этәрә, аяуһыҙ һуғышырға өндәй. Кем дә кем дәғүәсеһен бер мәлгә генә йәлләй, үҙенең хисләре ҡолона әүерелә һәм еңелә, хатта төҙәлмәҫ яра алыуы ла бар. Һин үлтермәһәң, үҙеңде үлтерәсәктәр - ошо принцип ҡына эшләй профессиональ рингта. Йығылып барған дәғүәсене ҡыуып етеп, тағы өҫтәп һуғыу бында ҡәҙимге, хатта мотлаҡ була торған хәл һанала. Минең бер мексикан дуҫым бына инде ике йыл да дүрт ай комала ята, сәбәбе, әлбиттә, үрҙә аталған йәлләү тойғоһо түгел.

**▸ Бөгөн күп кенә йәштәр Америка фильмдарынан күреп, американдарса байрам итергә әүәҫләнеп бара төҫлө. Америка йәштәренең ял итеү мәҙәниәте ысынлап та телевизорҙағы кеүекме, әллә икенсе төрлөмө?**

**Сабир:** Рәсәйҙә "Әйҙә, побухаем", тиҙәр йәштәр осрашһа. Йәғни, эсеп алырға саҡырышалар. Ә Америкала ундай һүҙбәйләнеш бөтөнләй юҡ. Унда "Әйҙә, спортзалда шөғөлләнеп алайыҡ", тип саҡырыша дуҫтар-таныштар. Унда иртәнге сәғәт 5-тә тороп, алтынсы яртыла йүгерә торғайныҡ. Мин, әйтәйек, әле саҡ йүгерергә килә ятһам, 40-60 йәшлек оло-оло кешеләр күптән йүгереп йөрөй. Манхеттендағы ҙур тәҙрәле спортзалдарҙа иртәнге биштән тренажер залдары асыла, ул тренажерҙарға 3-4 кеше һәр ваҡыт сират көтә.

**Хәбир:** Ысынлап та, Америкала кешеләр сәләмәт йәшәү рәүеше алып барырға тырыша. Беҙҙәге ауылдарҙа күҙәтелгән эскелек унда бөтөнләй юҡ кимәлендә. Теләгән кеше өйөндә генә эсә, әммә сит кешегә иҫерек килеш күренеп йөрөмәй. Уларҙа тәрбиә икенсе төрлө.

**▸ Милли көрәш буйынса Рәсәй Федерацияһының абсолют чемпионы Вәкил Ильясов тигән егетте беләһегеҙҙер, уның бер ҡыҙыҡ холҡо бар: берәй ярышта яңылыштан еңелһә, шунда уҡ сәмләнеп, бер аҙна буйы шөғөлләнә лә, дәғүәсеһенә шылтыратып, уны Рәсәйҙең теләһә ниндәй мөйөшөнә барып табып, тегенең менән ҡабаттан көрәшеп, еңеп, тынысланып ҡуя. Ғөмүмән, еңелгән кешенең бер өҫтөнлөгө бар - ул бүтән еңелмәҫ өсөн еңелә, тиҙәр. Һеҙҙең өсөн еңелеү нимә ул, әллә һеҙҙең еңелгәнегеҙ юҡмы?**

**Хәбир:** Рус телендә яңғыраған бер ҡанатлы һүҙ бар. Еңелеүһеҙ еңеү булмай. Минең һуңғы WBF версияһы буйынса Донъя чемпионы титулы өсөн көрәшемдә мин еңгәнмендер, тип уйлайым. Бокста шундай бер күренеш бар, хәйер, ундай күренеш тормоштоң башҡа күп кенә өлкәләрендә лә сағыла - ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ, танышлыҡ та ҡайһы саҡта хәл иткес роль уйнап ҡуя. Шулай уҡ судьялар ҙа, рефери ҙа барыбер тауышын үҙ ватандаштары файҙаһына бирә, һәр кем үҙ спортсыһын яҡлай. Шуға күрә, ситтә көс һынашҡан саҡта нокаутҡа ғына оҙатып өлгөрмәһәң, мәрәйҙәр буйынса еңеүең бик икеле. Был ярыш тамамланғас, миңә бер мексикан егет килде лә "Был көрәштә һин еңдең", тип, ҡулымды ҡыҫты һәм ярыш тамамланғас, буйвол бүләк итте. Килеп ҡулымды ҡыҫҡан был кеше урындағы эшҡыуар булып сыҡты. Фекеремде йомғаҡлап, еңелеүҙең ояты юҡ, тип әйтмәксемен, киреһенсә, унан бүтән еңелмәҫ өсөн һабаҡ алып ҡалырға кәрәк.

**▸ Альберт Эйнштейн, үҙенең иң бөйөк асышын - сағыштырмалыҡ теорияһын асҡандан һуң: "Мин үҙемдең халҡыма рәхмәтлемен, улар мине үҫтерҙе", - тип әйтеп, үҙенең уңыштарының сере халҡында булыуын билдәләгән. Башҡорт милләте вәкиле булыу, Алдар, Салауат батырҙар рухы һеҙгә ярҙам итәме?**

**Сабир:** Ярҙам итәлер, тип уйлайым...

**Хәбир:** Атай-әсәйҙе һайлап алмайҙар, тиҙәр. Шуның кеүек, тыуған илде лә һайлап алмайҙар. Миңә ҡалһа, үҙ Ватаны менән теләһә кем ғорурлана ул. Минең уйлауымса, ғорурланыу ғына аҙ, һине белгән кешеләр үҙеңде өлгө итеп алһын, һинең менән ғорурланһын. Шулай йәшәргә тейеш кешемен тигән кеше, ирмен тигән ир. Ҡайҙан булыуың менән ғорурланыу өсөн әллә ни ҙур тырышлыҡ та, эш тә талап ителмәй. Ә һин эшең аша барыһына ла файҙа килтер, шуның менән ихтирам яулап ҡара! Икенсенән, тарихҡа һылтанырға түгел, яҡшы эштәр башҡарып, үҙ эҙеңде ҡалдырырға, киләсәк өсөн йәшәргә кәрәк. Юғиһә, ғорурланыусылар

✓ *Мин рингҡа елән, бүрек кейеп сығып, ҡыҙыҡһыныусыларға үҙемдең башҡорт кешеһе булыуым тураһында һөйләргә тартынмайым. Мексикандарҙа, американдарҙа башҡорт еләне, минең милләтем һәр саҡ ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра.*

# БЕР НИ ТҮГЕЛ,

## ә көсһөҙҙө - һындыра

**▶ Эльбрус Ниғмәтуллин сираттағы донъя рекорды ҡуйғас, Калифорния штаты губернаторы, киноактер Арнольд Шварценеггер уны үҙенә саҡырып алып осрашҡан. Был хаҡта Эльбрус үҙе һөйләне беҙгә. Ошо ваҡиғанан һуң күптәр, Эльбрусҡа килеп, үҙҙәренең дә башҡорт милләтенән булыуы тураһында әйтергә ашыҡҡан. Йәғни, көслө кешегә һәр саҡ һыйыналар. Боксты аңламаһаҡ та, һеҙҙең еңеүҙәрҙе күреп, беҙҙең шундай милләттәштәр бар бит, тип ҡыуанабыҙ.**

**Сабир:** Тап ошо уй беҙҙе, Хәбирҙе, Эльбрус Ниғмәтуллинды, башҡорт балалары уҡыған мәктәптәргә йөрөтә. Американдарҙың спорт менән әүҙемерәк шөғөлләнеүе, күп кенә спорт төрҙәре буйынса яҡшы үрҙәр яулауы сәмгә тейә. Ни өсөн улар шул тиклем шәп тә, ни өсөн беҙҙә ундай кешеләр һирәк? Беҙҙең балалар сит ил балаларынан ҡайһы ере менән кәм? Минеңсә, балаларға өлгө юҡ. Балаларҙың күҙҙәрендә сәм осҡондары уянғанын күргем килә минең.

**Хәбир:** Беҙҙә кемдәрҙер шарттар юҡлыҡҡа һылтанырға ярата. Спорт менән шөғөлләнер инек тә, шарттар юҡ, йәки, уңышлы булыр инек, шарттар юҡ, һәм башҡалар. Көсһөҙ кешеләр генә шулай тиергә ярата, минеңсә. Үҙебеҙҙән алып әйтәм, беҙҙең тыуған ауылда шарттар бөтөнләй булманы, ә беҙ 8 саҡрым алыҫлыҡтағы Дәрүишкә йәйәү йөрөп уҡыныҡ, шундағы кикбоксинг секцияһына йөрөнөк. Бер нәмә лә юҡ икән, трактор тәгәрмәсен булһа ла күтәрергә була, шул уҡ ваҡытта иң файҙалы күнекмә - ул йүгереү. Иң тәүҙә теләк булырға тейеш. Теләк һәм ҡеүәт булһа, барыһы ла яулана, ҡаршылыҡтар үҙенән-үҙе юҡҡа сыға. Үҙем күргәнем бар, күп ғаиләләрҙә тренажерҙар бар. Бына шул парадокс: бер ғаилә лә бер-ике айҙан артыҡ ҡулланмай бындай тренажерҙарҙы.

Спортты популярлаштырыу телевидениенан да башланырға тейеш. Кешегә телевизорҙан килгән мәғлүмәт тиҙерәк һеңә. Америкала боксерҙарҙы телевизорҙан бик йыш күрһәтәләр. Улар Америкала герой, ысын мәғәнәһендә өлгө. Ә беҙҙә, Штаттар менән сағыштырғанда, бокс бөтөнләй юҡ, тип әйтергә лә була. Булһа ла, шоу кимәлендә генә үтә.

**Сабир:** Шарттар үҙенән үҙе генә барлыҡҡа килмәй шул. Ошо шарттарҙы тыуҙыра ла белергә кәрәк. 2007 йылда мин, өс йыл Америкала йәшәгәндән һуң, тыуған яҡтарға ҡайттым, аспирантураға уҡырға индем, кандидатлыҡ диссертацияһы яҙа башланым һәм Силәбе өлкәһе Сыбаркүл районында тыуып үҫкән һылыу башҡорт ҡыҙына өйләндем. Хәҙер бизнесым бар, рекламалар гәзите сығарам, үҙемдең күсемһеҙ милкем - бөҙрәханам, ательем кешеләрҙе хеҙмәтләндерә, махсус техника һатыу менән дә шөғөлләнәм. Спортты ла дауам итәм, әммә Хәбир һымаҡ профессиональ кимәлдә шөғөлләнмәйем. Йәмәғәт эштәренән, балалар менән аралашыуҙан да йәм табам. Бына шулай үҙемә һәм ғаиләмә көн күрер шарттар тыуҙырам.

**Хәбир**: Мин әле тағын берәй 5-6 йыл ете диңгеҙ аръяғында булырмын, тип уйлайым. Әммә барыбер телемде, халҡымды, туғандарҙы һағыныуым тыуған еремә алып ҡайтасаҡ.



*Хәбир: Атай-әсәйҙе һайлап алмайҙар, тиҙәр. Шуның кеүек, тыуған илде лә һайлап алмайҙар. Миңә ҡалһа, үҙ Ватаны менән теләһә кем ғорурлана ул. Минең уйлауымса, ғорурланыу ғына аҙ, һине белгән кешеләр үҙеңде өлгө итеп алһын, һинең менән ғорурланһын. Шулай йәшәргә тейеш кешемен тигән кеше, ирмен тигән ир. Ҡайҙан булыуың менән ғорурланыу өсөн әллә ни ҙур тырышлыҡ та, эш тә талап ителмәй. Ә һин эшең аша барыһына ла файҙа килтер, шуның менән ихтирам яулап ҡара! Икенсенән, тарихҡа һылтанырға түгел, яҡшы эштәр башҡарып, үҙ эҙеңде ҡалдырырға, киләсәк өсөн йәшәргә кәрәк. Юғиһә, ғорурланыусылар күп ул бөгөн, ә ысын эш эшләүселәр һирәк.*

**▶ Эльбрус Ниғмәтуллиндың "Көслө кешегә һыйыналар" тигәне һеҙгә лә билдәлелер. Ғөмүмән, көслө булыуы рәхәтме, әллә ҡыйынмы?**

**Хәбир:** Әлбиттә, "Көслө кешегә һыйыналар" тигәнде ике мәғәнәлә әйтеп була. Рухи яҡтан көслөләр ҙә бар бит. Быныһы Хоҙайҙан, Тәбиғәттән килгән сифат инде. Ә физик яҡтан көслө булырға өлгәшеү өсөн бик күп шөғөлләнергә, бик ныҡ тырышырға кәрәк. Быға өлгәшкәс, әлбиттә, үҙеңде формала тотоу өсөн тағы тырышырға кәрәк. Халыҡты үҙ көнөн үҙе күрергә, эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнергә өйрәтергә, ә йәштәрҙе спортҡа, башҡа эштәргә ылыҡтырырға кәрәк.

**▶ Америкалағы тормоштан һуң Рәсәйҙәге хәлдәрҙе күреү ауырыраҡтыр шул инде…**

**Сабир:** Һис тә улай түгел. Әле Хәбир заман үҙгәрештәре алдында аптырап ҡалып, үҙ йүнен үҙе йүнләй алмаған милләттәштәр тураһында әсенеүен генә белдерҙе. Ысынында, Рәсәйҙә ирек күп ул бөгөн, ә ысын эш эшләүселәр һирәк.

Мин рингҡа елән, бүрек кейеп сығып, ҡыҙыҡһыныусыларға үҙемдең башҡорт кешеһе булыуым тураһында һөйләргә тартынмайым. Мексикандарҙа, американдарҙа башҡорт еләне, минең милләтем һәр саҡ ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Киң билдәле Warner brothers компанияһының бер режиссеры, беҙҙең менән танышҡандан һуң, башҡорттар тураһында фильм төшөрөргә ниәте барлығын әйтте. Киләсәктә был фильмды күрербеҙ, тип өмөтләнәбеҙ.

**Сабир:** Беҙҙең эргәлә ниндәй генә милләт вәкилдәре тормаһын, кемгә генә был һорауҙы бирмә, барыһына ла үҙ манараһы бейек тойоласаҡ. Шулай ҙа, Әхмәр ағайҙың һүҙҙәрен ҡеүәтләйем, тарихты белһәң, көс бирәләр, тип уйлайым. Тарихыбыҙҙы ныҒыраҡ өйрәнергә, уның серҙәренә ныҒыраҡ төшөнөргә кәрәктер әле беҙгә лә.

**Сабир:** Бөтә кеше лә көслө була ала, әммә "көслө булып тыумайҙар, ә көстө туплайҙар".

**▶ Әгәр спорт юлынан китмәгән булһағыҙ, ниндәй юлдарҙы һайлар инегеҙ?**

**Хәбир:** Йә бизнес, йә сәйәсәт юлын һайлаған булыр инем, моғайын. Әйтәйек, үҙебеҙҙең Арғаяш районы башлығы - башҡорт кешеһе. Әммә ул ауылдарҙа йәшәгән милләттәштәргә бер ниндәй ҙә ярҙам күрһәтмәй. Йәштәрҙең эсеүе, улар өсөн бер ниндәй ҙә саралар үткәрелмәүе борсой мине. Бына әле өс йыл Нью-Йорк ҡалаһында йәшәгәндән һуң тыуған яҡтарға ҡайтҡас, ауылыбыҙҙағы алама күренештәрҙе күреп, иҫ китте. Әгәр мин район башлығы урынында булһам, кешеләргә ярҙам итергә тырышыр инем. Беҙҙең ауылға юл да килеп етмәгән әле. Балалар йәйәү йөрөй күрше ауыл мәктәбенә, автобус та көнөнә бер тапҡыр ғына килә. Улай булырға тейеш түгел. Берәк, йәшәүе лә еңелерәк. Америкала 8-9-ҙан эш башлана. 18 сәғәткә тиклем эшләйһең. Шунан күнекмәләр башлана, сәғәт төнгө ун икелә йә берҙә генә йоҡларға ҡайтаһың. Көн дә шулай ҡабатлана. Беҙ Америкаға барғас, иң тәүҙә йөк ташыу эштәре менән шөғөлләнә башлағайныҡ, аҡсаһы ла ярайһы уҡ яҡшы сыға ине. Әммә бер көн эш ҡалдырһаң, һиңә килгән түләү ҡағыҙҙары өйөлөп китәсәк: телефонға, машинаға, страховкаға, фатирға - түләп кенә өлгөр. Унда һиңә шулайтып баҫым яһайҙар.

**Хәбир:** Эйе, ай һайын, аҙна һайын телефоныңа смс-хәбәрҙәр килә лә килә. Саҡ ҡына дөрөҫ булмаған аҙым яһаныңмы, түләүҙәреңде кисектерҙеңме, унлата хаҡ түләргә тура килә. Капитализмдың талаптары ҡаты. Ә Рәсәйгә капитализм килеп етмәгән әле.

**▶ Сынығыу үткәнһегеҙ инде улай булғас… Хәбир, тыуған илгә ҡайтҡас, бындағы эшмәкәрлегең спортҡа бәйле буласаҡмы? Әйтәйек, Өфөгә килеп, секция асып, тренерлыҡ итеүгә нисек ҡарайһың?**

**Хәбир:** Тренерлыҡ - баһаланмай торған, ҡәҙерһеҙ хеҙмәт ул, минеңсә. Шулай ҙа, әгәр ҙә саҡырһалар, шатланып ризалашыр ғына инем был эшкә, сөнки Өфөлә, йә булмаһа, Арғаяш районында йәшәргә теләгем ҙур. Башҡорттарым араһында йәшәгем килә.

**▶ Яҡын арала рингта ниндәй осрашыуҙар көтөлә?**

**Хәбир:** Ноябрь айында буласаҡ бер осрашыу, тип әйтте промоутерым. Әммә дәғүәсемдең кем булыры тураһында әлегә әйтә алмайым. Кем менән көс һынашырым билдәле булыу менән мин ул кеше тураһында мәғлүмәт менән танышырға хоҡуҡлымын. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, миңә ҡайһы бер спортсыларҙың мәғлүмәттәрен тулы бирмәйҙәр. Әйтәйек, һуңғы осрашыуҙа ҡаршы яҡ һуғышсыһының 13 тапҡыр профессиональ һуғышы булғанын, шуларҙың береһендә генә еңелгән икәнлеген белдем. Ә миңә "Уның ни бары 12 генә һуғышы, ә һинеке - 15", тип тынысландырғайнылар. Ярыш көнө килеп еткәс, теге егеттең һәүәҫкәрҙәр рингында 400 һуғышы булыуы, Пекинда үткән олимпиадала ҡатнашыуы тураһында ишеттем. Был төрлө маҡсаттан сығып эшләнә. Ғөмүмән, профессиональ бокс - шул уҡ бизнес ул. Унда шул уҡ ҡырағай закондар идара итә. Профессиональ бокссы бер ваҡытта ла үҙенең киләһе һуғышы ҡайҙа, кемгә ҡаршы үтәсәк икәнен әйтә алмай. Быны промоутеры ғына белә.

**▶ Денис Шафиҡов та ошондай уҡ фекерҙәре менән бүлешкәйне. Дәғүәсеһе тураһында мәғлүмәт еткергәс, оппонентының "бушағыраҡ" урынын иҫәпләп сығарыуы, шул иҫәпләүҙәренән сығып, рингтағы хәлен самалауы һәм дәғүәсеһен арытып, еңеп ҡуйыуы тураһында һөйләгәйне. Ә һинең, Хәбир, иң ауыр, иң уңайһыҙ, иң көслө дәғүәсең кем булды?**

**Хәбир:** Профессионалдар араһында бишенсе тапҡыр рингҡа бер бейек кәүҙәле мексикан егеты менән сыҡҡайным, шуны һеҙ атаған критерийҙарға индереп була. Ул осрашыу бик көсөргәнешле үткәйне. Ни өсөн тигәндә, осрашыу көнөнә тиклем дәғүәсемдең ауырлыҡ категорияһын бутап әйтеп килделәр. Ахыр сиктә, ауырлыҡ буйынса 5 фунтҡа ауырыраҡ, етмәһә, ярты башҡа бейегерәк дәғүәсегә ҡаршы һуғышырға тура килде. Шуға күрә, мин ике тапҡыр нокдаунға эләктем. Әммә, үҙемдең тырышлығым арҡаһында ғына дүртенсе раундта үҙен нокаутҡа оҙаттым. Иң ауыр осрашыуым ошо булғандыр.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Хәбир менән Сабир Сөләймәновтар үҙҙәрен ысын мәғәнәһендәге башҡорт батырҙары итеп күрһәтә бөгөн. Уларға ҡараһаң, уларҙың телмәренә, ҡылыҡтарына, үҙ-үҙҙәрен тотошона иғтибар итһәң, ысынлап та уларҙа ата-бабалар холоҡ-фиғелен таныйһың. Үҙ көстәрен ете диңгеҙ аръяғында, ситтәр араһында һынап ҡараған, уларҙан өҫтөнлөк алған батырҙар бит улар. Егеттәрҙең "Үҙ халҡың ғорурланырлыҡ эштәр эшлә!" тип саҡырыу ташлауын бөгөндән үк девиз итеп алырға кәрәк түгелме икән, йәштәр?**

**Әхмәр ҒҮМӘР- ҮТӘБАЙ**
әңгәмә ҡорҙо

**Илгизәр БУЛАТОВ**
яҙып алды.

✓ **Мәңге шулай бер-беребеҙҙе яратып, иркә һәм наҙ кисереп кенә йәшәрбеҙ һымаҡ тойолған тылсым донъябыҙҙың күген шомло репрессия болоттары ҡаплап алды.**



Моғайын, һәр кемдең тормошонда башҡаларға ғибрәт итеп һөйләрлек ваҡиғалар булалыр. Ғүмер бит ул. "Үтеп кенә киткән ғүмеремде ярты көнкәйҙәй ҙә күрмәнем" тип йырлаһалар ҙа, шөкөр итә белгәндәр өсөн шаҡтай оҙон. Йәшәлгән йылдары саманан үтә башлаған ҡайһы бер ололарҙың: "Ялҡтым ошо тормоштан", - тигән һуҡраныуы шуға ишара. Тик нишләмәк кәрәк - ғүмер тигән шәйгә беҙ хужа түгел. Теләп килмәгән донъянан үҙ теләгең менән китеп тә булмай.

Бына мине алайыҡ. Әгәр теләк буйынса яралыу мөмкинлеге булһа, һис тә мең туғыҙ йөҙ ун һигеҙенсе йылда тыумаҫ инем. Донъяға алдараҡ йәки һуңыраҡ килһәм, бәлки, исемемде лә Клара тип ҡушмаҫтар ине. Йәнәһе, заман заңына яраҡлашалар. Атай менән әсәйҙе әйтәм инде. И-и, ул йылдарҙа яҡты идеалдар һәм яңы тормош тип һаташҡандар бер улар ғына булған тиһеңме?

Әгәр әлеге яңы тормош тигәндәре батмусҡа һалып ҡына тапшырыла торған ғәләмәт булһа, уға бер кем дә ҡаршы килмәҫ ине. Баяғының бөтә ғилләһе шунда: уның өсөн кемдер һуғышырға тейеш. Әлбиттә, уныһы ҡыҫыр хыялдар шауҡымынан илереп, һөрән һалған, олоғара фетнә ҡуптарған "аҡыллы баштар" иңенә түгел, ә минең атайым һымаҡ ябай халыҡ өҫтөнә төшкән. Ә һуғыш хатта әкиәттә лә ҡорбанһыҙ булмай. Шуларҙың береһе - минең граждандар һуғышында һәләк булған атайым. Бер төркөм фанатиктарҙың ҡотҡоһонан ҡупҡалйыған ҡан-яу арҡаһында беҙ уның менән бер-беребеҙҙе күреп тә өлгөрмәгәнбеҙ хатта.

Бер һөрөнһәң - ҡара кискәсә, тигәндәй, мин әсәйемдең төҫөн дә яҙа-йоҙа ғына хәтерләйем. Ул, йоттан миктәп, мең туғыҙ йөҙ егерме икенсе йылда вафат булғанда, мин дүрт йәштә генә булғанмын. Күпме тырышһам да, әсәйемдең сырайын асыҡ итеп күҙ алдына килтерә алмайым. Бары тик урындығыбыҙ өҫтөнә түшәп йөрөгән әрмәккә төрөп, уны зыяратҡа алып киткәндәрен иҫләп ҡалам. Тағы ла әсәйемдең кәүҙәһен өйҙән алып сыҡҡан саҡтарында йәнемде тетрәткән йәлләү тойғоһо хәтерҙә ҡалған. Әйтерһең, кескәй йөрәгемдең иң аяулы бер киҫәген өҙөп алып киттеләр ҙә, әсәйем менән бергә күмделәр.

Минең аңлы тормошомдоң бер өлөшө Сәрмән балалар йортонда үтте. Аҙаҡтан билдәле булыуынса, ауылда атайымдың ир һәм ҡыҙ туғандары булған, әммә уларға мин кәрәкмәгәнмен, күрәһең. Уйлап ҡараһаң, үҙҙәре көскә йән аҫрап йәшәгән меҫкендәргә бер имгәктең ни хәжәте? Әсәйемә килгәндә иһә, уның морон төртөр ҡәрҙәштәре булмаған шикелле, сөнки үҙе етемлектә үҫкән. Йыш ҡына ошоларҙы уйлайым да: "Етемселек зат ҡыуа", - тигән халыҡ һынамышының дөрөҫлөгөнә хайран ҡалам.

Ун алты йәшем тулғас, балалар йортоноң юлламаһы буйынса мин Өфөгә Тимирязев исемендәге педагогия дәүләт институты эргәһендә ойошторолған эшселәр факультетына барып эләктем. Ул ваҡытта әлеге рабфак беҙҙең кеүек йәш-елкенсәкте башлыса педагогия йүнәлеше буйынса юғары уҡыу йорттарына инеү өсөн әҙерләй ине. Минең уҡыуым Сәрмән балалар йортондағы башланғыс синыфтарҙа уҡ шәп булды. Рабфакта иһә уҡыуға булған һәләтем тағы ла асыла төштө, белем алыуға ынтылышым көсәйҙе. Уҡыу алдынғыһы булыуымды, әүҙемлегемде иҫәпкә алып, факультетта комсомол комитеты секретары итеп һайлап ҡуйҙылар. Балалар йортонда тәрбиәләнеү ҙә йоғонтоһоҙ ҡалмағандыр - ул мине үткерлеккә, бешелеккә өйрәткәйне. Үҙемдең дә йәшлек көсөн ҡайҙа ҡуйырға белмәгән дәртле саҡ ине шул - уҡыу менән йәмәғәт эштәренән тыш, яҙышыуға таҫылланып алдым. Ул замандарҙа Өфөлә сыҡҡан "Ленин юлы", "Яңы юлда" гәзиттәрендә, "Октябрь" журналында әленән-әле мәҡәләләрем, очерктарым даими рәүештә баҫылды. Уҡыуға сарт йәбешеп ятыуым да, йәмәғәтселек күҙенә салынырға тырышып, гәзиттәргә яҙышыуым да аңлы рәүештә башҡарылды, сөнки мин инде еткән ҡыҙ һәм шуны төшөнә инем: үҙ-үҙемдән башҡа ышаныр кешем юҡ.

Мең туғыҙ йөҙ утыҙ алтынсы йылда рабфакты тамамланым. Өмөтлө ҡәләм тибрәтеүсе, тип, минең бер үҙемде Ҡаҙан университетының журналистика факультетына ебәрергә тейештәр ине. Ләкин тап шул саҡта тормош юлымда Нурисламдың осрауы яҙмышымды ҡырҡа үҙгәртеп ебәрҙе. Уны мин тәү башлап Юғары мәктәп үҙәк комитетының Өфөләге вәкиллегендә, артабан уҡырға китеү хәстәрлеген күреп йөрөгәндә осраттым. Нурислам әлеге комитеттың Башҡортостандағы вәкиле вазифаһын башҡара ине. Минән ни бары ун йәшкә оло булыуына ҡарамаҫтан, байтаҡ тормош тәжрибәһе туплаған: үҙҙәренең яғындағы волость үҙәгендә урыҫ-башҡорт мәктәбен тамамлаған, Ҡаҙандағы Үҙәк мосолман хәрби-сәйәси мәктәбендә уҡыған. Бынан һуң ике телде лә һыу һымаҡ белгән уҡымышлы егет үҙ төбәгендәге волостарҙа партия йүнәлешендәге ҙур-ҙур вазифаларҙа хеҙмәт иткән. Өфөгә күскәс, Башҡортостан ғилми-тикшеренеү институтында сектор мөдире, өлкән ғилми хеҙмәткәр булып эшләп өлгөргән.

Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы - бер-беребеҙҙе оҡшаттыҡ та ҡуйҙыҡ. Һирәкләп булһа ла тәү күреүҙән тоҡанған ысын һөйөү осрай бит ул. Мин быны үҙ башымдан кисергәнгә әйтәм. Нурисламдыҡы нисектер, әммә минең йөрәк танышып өлгөрөр-өлгөрмәҫтән: "Шул!.. Шул!.." - тип тибә башланы. Ғашиҡ булмаҫлыҡ түгел ине үҙе лә: уртасанан саҡ ҡына ҡалҡыуыраҡ кәүҙәле, киң яурынлы. Ҡара тулҡынлы сәстәре килешле генә итеп артҡа таралған, ҡыйылып киткән ҡара ҡаштары аҫтынан һорғолт күҙҙәр баға. Уларҙан ихласлыҡ һәм ниндәйҙер аңлатып булмаҫлыҡ эске нур бөркөлөп, сырайына мөләйемлек, олпатлыҡ бирә.

Мин дә һылыулыҡта һуңғыларҙан булмағанмындыр, юҡһа, егерме һигеҙ йәшкә еткән егеттең күңелен сихырлай алыр инемме? Бығаса юлында ниндәй генә ҡыҙ осрамаған тиһең, ә ул йөрәген тап миңә асты - ғашиҡ булғанын аңғартты. Күрәһең, тойғолары ысынлап та саф һәм тәрән булғандыр - бер нисә осрашыуҙан һуң өйләнешеү тураһында һүҙ ҡуҙғатты. Мин дә Нурисламға иҫ-аҡылымды юйыр сиккә етеп ғашиҡ булғайным - тәҡдименә риза булдым Яҙылышып, бергә йәшәй башланыҡ. Уҡыуҙы бер йылға кисектерергә ҡарар итеп, "Яңы юлда" гәзите редакцияһында әҙәби хеҙмәткәр булып эшләй башланым.

Үкенескә ҡаршы, һөйөү менән бәхеттән туҡылған ғаилә тормошобоҙ ни бары бер йылға һуҙылды. Мәңге шулай бер-беребеҙҙе яратып, иркә һәм наҙ кисереп кенә йәшәрбеҙ һымаҡ тойолған тылсым донъябыҙҙың күген шомло репрессия болоттары ҡаплап алды. Улар, ҡуйырғандан-ҡуйыра барып, халҡыбыҙҙың күҙгә күренгән, йәнетәне менән партия һәм ил эшенә бирелгән һыу һөлөгөндәй ул-ҡыҙҙарына ябырылды. Кешенең тәбиғәте шулай: тирә-йүндәге бәлә-ҡаза үҙенә ҡағылмаҫ, урап үтер, тип уйлай. Хатта әжәлдең нәғеҙ уға яҫҡынырына һуңғы сиккәсә ышанмай. Беҙ ҙә баяғы афәттең ишегебеҙҙе ҡағырын, ҡорола ғына башлаған оябыҙҙы туҙҙырырын күҙ алдыбыҙға ла килтерә алмай инек.

Йәй башында Нурисламды ҡулға алдылар. Уға япһарылған нахаҡ ғәйеп - буржуаз милләтселек ине. Милләтсе - тимәк, халыҡ дошманы. Халыҡ дошманы - тимәк, атырға! Йәй урталарында, халыҡ дошманының ҡатыны булараҡ, сират миңә лә килеп етте - топ-тойоҡҡа Себергә, холоҡ төҙәтеү колонияһына ебәрергә хөкөм иттеләр. Шулай итеп, бер мең дә туғыҙ йөҙ утыҙ етенсе йыл кемдеңдер ҡара золомо һәм мәкерле ихтыяры буйынса беҙҙең быуын зыялыларын үҙебеҙ көнө-төнө хеҙмәт иткән халыҡҡа дошман яһап ҡуйҙы.



Мәүлит Ямалетдин

# Ҡыҙыльяр

Новелла

* * *

Тотҡонлоҡ минең өсөн бер мең туғыҙ йөҙ ҡырҡ етенсе йылда тамамланды. Был - һуғыштан һуң ил халҡының яраларын ялаған, хужалыҡтағы тишек-тошоҡтарҙы ямаған сағы ине. Ҡайҙа ҡарама - аслыҡ, яланғаслыҡ. Станция һайын ҡыҙырас балалар өйөрө. Улар, сәүкә тубы һымаҡ сыр-сыу килеп, бер нисә минутҡа туҡтаған поезға ябырыла, вагондар буйлап икмәк һорай, әйбер, аҡса теләнселәй.

Силәбегә етеп килгәндә минең лагерҙан бирелгән ҡоро паегым, уға ҡушып үҙем алдан киптереп әҙерләгән йыйынтым һалынған тоҡсайымды урланылар. Ул вагондың бер яҡ осондағы чандан кружкама ҡайнар һыу ағыҙып алып килгән арала юҡ булды. Шуға күрә, ниһайәт, Магнитогорскиға килеп төшкәндә, минең эстә ас бүреләр олой ине. Уға ҡарамаҫтан: "Аслыҡҡа өйрәнгән баш", - тип уйланым да, тыуған ауылым урынлашҡан Яйыҡ үренә ҡарай атланым. Илдә сыпсыҡ үлмәй ул. Моғайын, атайымдың берәй затзәүере йәшәйҙер унда - морон төрттөрөрҙәр әле. Ят ярлыҡамаҫ, үҙеңдеке үлтермәҫ, тигәндәре буш хәбәр түгелдер.

Мин тыуған яғымды тыным менән тартып алырҙай булып, осоп-ҡунып уға уҡталһам да, Верхнеуральск ҡалаһына килеп еткәс, хәл тамам бөттө. Аяҡ быуындары тотмай, күҙ алдында ҡара түңәрәктәр бейешә. Эңер ҡараңғылығына сумған ҡалаға тәнтерәкләп килеп индем. Берәй ерҙә туҡтап, төн үткәреү сараһын күрмәй хәл юҡ. Ләкин тирә-яҡтағы башҡорттар өсөн ғүмер баҡый ят булған ҡалала кем индерер? Тоттом да, ҡарамаҡҡа ҡалғандарынан ҡайтышыраҡ булған өйҙөң ҡапҡаһын туҡылдаттым. Үҙҙәренә боролғас уҡ өрә башлаған эт ярһып абаларға тотондо. Өй ишеге асылды, хужаның этен тыйған тауышы ишетелде: "Төрткөз! Тыныш!.." Бәхеткә күрә, үҙебеҙҙең ҡаҙаҡтар булып сыҡты. Әллә ни яҡты йөҙ күрһәтмәһәләр ҙә, ҡундырып сығарырға риза булдылар. Минең эс йылынып китте. Хоҙайҙың рәхмәте төшкөрө әҙәмдәр! Шул ваҡытты уйлаһам, йөрәкте әле булһа йылы тойғолар солғап ала, күңел нескәрә, илағы килә. Донъяла бер үкенесем ҡалды: аҙаҡтан, тормошом рәтләнгәс, эҙләп табып, ҡабаттан рәхмәт әйтеп, икеһенә лә күлдәк кейҙереп китә алманым. Әлеге шул тормоштоң ығы-зығыһынан бушай алмаған булып ҡыялыу ғәләмәте. Хәҙерге көндә улар тере түгелдәрҙер инде. Йәндәре йәннәттә булһын!..

Хужа тура һүҙле, асыҡ-ярыҡ кеше икән - башта уҡ иҫкәртеп ҡуйҙы:

- Ҡоналҡа бар, нан жоҡ.

"Ай, Алла, ниндәй нан?! - тип уйлайым эстән. - Илдә булмаған икмәк был өйҙә нисек булһын? Һеҙ индермәһәгеҙ, ҡайҙа барыр инем?.." Ошо урында уйҙарым өҙөлә - тәҡәтһеҙ булып арыған тән ял һорай һәм мин ҡайғы-хәсрәттәрҙән, тормоштоң барлыҡ хәстәрҙәренән азат булған йоҡо донъяһына сумам...

Иртәгәһенә, хужаларға рәхмәттәр уҡып, юлымды дауам иттем. Яйыҡ буйлап һуҙылған ат юлы күгәреп ятҡан үркәсле тауҙарға яҡынлашҡандан-яҡынлаша. Уларға ҡул һуҙымы ғына ара ҡалғандай тойолһа ла, әле сәйәхәттең аҙағына тиклем байтаҡ. Самалауым буйынса, йәнә бер көнлөк юл. Уны үтеүе былай саҡта әллә ни ҡыйын булмаҫ ине, тик әлеге лә баяғы ҡорһаҡтың аслығы бәкәлгә һуға - хәл юҡ.

Хәл йыйырға туҡтаған арала юлдың ике яғында ҡыҙарышып бешкән еләктәрҙе өҙөп ҡабам, Яйыҡты ҡаплап үҫкән ҡуйы һаҙ эсенә инеп, серәкәйҙән талана-талана, ҡарағат ашайым. Емеш-еләк йөрәккә ял булып ҡалһа ла, ашағы килеү теләген оторо ҡуҙғыта. Их, бер туйғансы икмәк ашаһаң ине!

Төш ауыуғараҡ Ҡыҙыльяр ауылына килеп еттем. Ул тәрән ҡаҙан эсендә ултырғандай - тирә-яғын төрлө бейеклектәге тауҙар уратып алған. Яйыҡ йылғаһы уның көнсығышындағы тарлауыҡтан сыға ла, тауҙар тотҡонлоғонан арыныуына ҡыуанғандай ирәйеп, далаға аға. Йылғаның ярайһы уҡ тәрән, әммә һөҙәгерәк ярындағы йәйпәк таш өҫтөнә ултырып хәл алырға булдым. Эш шәптән булмаһа ла, күҙ - дарья - тирә-йүнде байҡап ултырам. Ана, яр аҫтында ике үҫмер уйнап йөрөй. Сыр-сыу килеп һыуға сиратлап таш ташлайҙар, ни тураһындалыр бәхәсләшеп алалар. Уларҙы күҙәтеп ултыра торғас, башҡа бер уй килде.

**(Дауамы бар).**

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

**Сентябрь - ул үҙе үк ниндәйҙер бер моң-һағышҡа тулы ай. Ошо айҙа башҡорттоң милли батыры Салауат Юлаев яҡты донъя менән хушлашып, тыуған иленән алыҫтарҙа, эстон ерендә, Балтик диңгеҙе ярында күҙен мәңгелеккә йома. Батырыбыҙҙың ҡасан, нисек вафат булыуы тураһында оҙаҡ йылдар билдәһеҙ була. Был тарих сере уҙған XX быуаттың етмешенсе йылдары башында элекке Эстон ССР-ы тарихсылары эҙләнеүе һөҙөмтәһендә асыҡлана. Ошоға бәйле үҙем менән армияла булған иҫтәлекле, шул уҡ ваҡытта фәһемле лә бер ваҡиға тураһында гәзит уҡыусыларға һөйләргә булдым. Сөнки был ваҡиға икенсе милләт кешеләренең беҙҙең башҡортҡа һәм дә милли батырыбыҙға булған ихтирамлы мөнәсәбәттәренең бер яҡты, матур күрһәткесе.**



# ӘРМЕ ЯҘМАЛАРЫ,

## йәки Салауат Юлаевтың вафат көнөн хәтерләп

Һалдат хеҙмәтен мин 1972-1974 йылдарҙа үттем. Минең өсөн Салауат Юлаев менән бәйле ваҡиғалар армияның беренсе көндәренән үк башланды. Башҡортостан егеттәре тейәлгән тулы бер эшелон Архангель өлкәһенә елдереп китеп барғанда, мине Ярославль вокзалында төн уртаһында эшелондан төшөрөп, алып ҡалдылар. Мине көтөп торған офицер һәм һалдат эргәһенә килеү менән офицер исем-шәрифтәрҙе һорашты ла, "Ниндәй милләт?" тип һораны. Башҡорт икәнде ишеткәс, бик тә ҡәнәғәт рәүештә: "Очень хорошо, башкиры еще те вояки. Потомки Салавата Юлаева всегда должны быть прекрасными солдатами. Так ведь, будущий рядовой Аминев?" - тип минән һораған булды, көләмһерәп. Шулайтып, минең Ярославль ерендә ике йылға һуҙыласаҡ һалдат хеҙмәтем Салауаттың данлы еле ҡағылып башланды.

Баяғы офицер менән һалдат бер үҙемде генә казармаға килтереп, ҡалдырып киттеләр. Һуң алып килеүҙәренә ҡарамай, иртән мине бөтәһе менән бергә уяттылар. Бәхетһеҙ, әрмелә бөтәһенә лә бер үк шарттар икән. "Подъем!" тигән яр һалып ҡысҡырыуға уянып китһәм, миңә ҡаршылағы караваттан ер-ерән һипкелле бер малай ҡарап ултыра. Минең уянғанды күргәс, "Һин кем?" тип һораны. Башҡорт тигәнде ишеткәс,"Ә, беләм, милли батырығыҙ Салауат Юлаев, бал ашайһығыҙ, ҡымыҙ эсәһегеҙ", тип үҙенең беҙҙең халыҡ тураһында ярайһы уҡ белемле икәнлеген белгертеп тә ҡуйҙы. Уның менән әрепләшеп, һөйләшеп торорға форсат бирмәнеләр. Бөтәһе менән бергә теге малай ҙа, мин дә физзарядкаға йүгерҙек. Йүгереп, аяҡ-ҡулдарҙы яҙып, физик күнегеүҙәр яһатып, аҙаҡ ашханаға алып барып ашатып, казармаға алып килделәр. Минең саҡырылыш йәш һалдаттар бөтәһе лә күптән үк килеп, аҙна-ун көн инде һалдат һурпаһын татып, бер-береһе менән танышып өлгөргәндәр ине. Мин яңы кеше булғас, "Ҡайһы яҡтан? Кемһең? Милләтең кем?" тигәнерәк һорауҙар менән ябырылдылар. Башҡорт икәнлегемде ишетеү менән һәр кем иң тәүҙә Салауат Юлаевты, йәиһә "Салауат Юлаев" хоккей командаһын иҫенә төшөрә һала.

Шулай итеп, минең армия хеҙмәте Салауат Юлаев менән башланып китте. Уҡыусыларға һөйләргә теләгән ваҡиға бер йыл хеҙмәт иткәс булды. Сираттағы хәрби дежурҙан ҡайтып, казарма алдына килеп туҡтаныҡ, ә өлкән сержант Фрейдок дежурҙан ҡайтыуыбыҙҙы еткерергә тип канцелярияға инеп китте. Рота командиры, сәйәсәт буйынса урынбаҫары менән урамға, саф алдына сығып, Фрейдоктың рапортын тыңлап бөткәс, теҙелгән сафты һөҙөп ҡарап, һәр бер һалдатты күҙ унынан үткәргәндән һуң: "Әминев, сафтан сығырға!" - тип бойорҙо. "Бер ниндәй ҙә эш боҙманым, хәрби дежурство яҡшы үтте, нимәгә сығаралар икән?" тигәнерәк уй менән саф алдына сығып баҫтым. Шунан һуң рота командирының сәйәсәт буйынса урынбаҫары минең милләтемде һораны. Быға саса минең башҡортлоғомды бөтәһе лә белеп, "Наш воинственный башкир", "Потомок Салавата Юлаева", йәиһә "Мусульманин" тип йөрөткәнгә күрә, мин, аптырањҡырап, бөтә саф алдында үҙемдең башҡорт милләтенән икәнемде хәтерҙәренә төшөрҙөм. Минең башҡорт икәнлегемде бөтә сафҡа ишеттергәндән һуң, замполит Рәсәйҙә башҡорттарҙың борон-борондан бер яуҙан да ситтә ҡалмауын, дөйөм ватаныбыҙ СССР-ға ла һәр саҡ тоғро хеҙмәт итеүҙәрен һәм башҡа шундай маҡтау һүҙҙәрен теҙеп алып китте. Салауат Юлаев, Пугачев яуына ла туҡталды: "Быға тиклем Салауат Юлаевтың ҡасан, ҡайҙа үлгәнен белмәй инек, тарихсылар башҡорт батырының Эстонияла 1800 йылдың сентябрь айында үлеүен асыҡлаған", - тип, замполит ҡулындағы "Огонек" журналынан бәләкәй генә мәғлүмәтте уҡып ишеттерҙе һәм: "Әминев, мә, был һинә армиянан иң яҡшы иҫтәлек булыр", - тип, "Огонек" журналын минең ҡулға тотторҙо. Замполиттың сәйәси әңгәмәһенән һуң рота командиры: "Слава доблестным сынам отечества, башкирскому народу! Ура! Ура! Ура!" - тип өс тапҡыр ҡысҡырырға бойороҡ бирҙе. Һалдатҡа нимә инде, тамаҡтарын яра яҙып, "Ура"ны өс тапҡыр рәхәтләнеп һөрәнләне. Халҡым тураһында бындай йылы маҡтау һүҙҙәре ишетеп, саф алдында һерәйеп баҫып, уны данлаған "Ура"ны тыңлап торған мин, әйтеп тә, аңлатып та биргеһеҙ ләззәтле минуттар кисереп, тамағыма төйөр тығылып, илап ебәреүҙән саҡ тыйылып ҡалдым. Ошо ваҡиға иҫкә килеп төшкәндә, ул рота командирына һәм замполитҡа мин әле булһа оло рәхмәт уҡыйым.

Был офицерҙарҙа башҡорттарға ҡарата бындай ихтирам уларҙың беҙҙең халыҡты яҡшы белеүенән булғандыр, тип уйлайым. Рота командиры Ҡурған өлкәһендә башҡорттар араһында тыуып үҫкән кеше ине. Ә замполит үҙе Иваново өлкәһенән булһа ла, Ленинград юғары хәрби-сәйәси училищеһында Учалы районынан Радик исемле бер башҡорт менән бергә уҡыған һәм уның менән йән дуҫтар булған. Замполиттың һөйләүенә ҡарағанда, был Радик тигән кеше училищела яҡшы уҡыуы һәм ҡурайсы булыуы менән данлыҡлы курсант булған. "Ундай һәләтле кешеләр бик һирәк осрай", тиер ине замполит, кисторен мине канцелярияға саҡыртып һөйләшеп ултырғанда. Күрәһең, баяғы Радик дуҫына булған ихтирамын миңә лә күсергәндер, тип уйлайым. Армиянан ҡайтыр алдынан да улар мине канцелярияға саҡырып, оҙаҡ ҡына һөйләшеп, минең киләсәккә ниндәй пландар ҡороуым менән ҡыҙыҡһынып, "Уҡырға кәрәк һиңә, Әминев, әгәр уҡырға уйлаһаң, яҙып ебәр, йүнәлтмә ебәрербеҙ", - тип оҙатып ҡалдылар. Ысынлап та, һүҙҙәрендә торҙолар. Өйгә ҡайтып, аҙерәк торғас, уҡырға инергә уйланым да, йүнәлтмә ебәреүҙәрен һорап, командирыма хат яҙып ебәрҙем. Рәхмәт, үтенесемде йыҡманылар. Ебәрҙеләр.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Аңлатып китергә кәрәк - мин хеҙмәт иткән рота туранан-тура Мәскәүгә буйһонған бәләкәй генә бер айырым часть ине. Шуға беҙ башҡаларҙан ситләшерәк йәшәнек. Беҙҙең ротала сафта китеп барғанда берәй һалдатты данлап, уның хөрмәтенә "Ура!", "Дан!" тип ҡысҡырыу йолаһы булды. Әгәр ҙә кемделер хурларға кәрәк булһа, беҙ ҡумәкләп был һалдаттың фамилияһын ҡысҡырып "Всеобщее презрение, ууу...уу..." тип ҡысҡырыр инек. Ҡасан, кем тарафынан тәү башлап индерелгәндер был йола, белмәйем, әммә бындай данлап йә хурлап ҡысҡырыу мин хеҙмәт иткән хәрби ҡаласыҡта тик беҙҙең ротала ғына ине. Бындай һөрәнләүҙәрҙә офицерҙар ҡатнашмай ине. Киреһенсә, ҡайһы ваҡыт артыҡ шаштырып ебәргән саҡтарҙа "Етте!" тип, беҙҙе тыйыңҡырайҙар ине. Әммә тотош халыҡты данлап һөрән һалыу, етмәһә, офицер бойороғо буйынса, тик бер тапҡыр, башҡортҡа ҡарата ғына булды...**

**Ә замполиттың бүләге булған "Огонек" журналы иһә, армия тураһында иҫтәлек булып, һалдат сумаҙаны төбөндә дембель альбомы менән бергә әле лә һаҡлана.**

**Зәкир СЫРЛЫБАЕВ.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

# ВИРТУАЛЬ ДОНЪЯЛА ЛА...

## йәштәргә күҙ-ҡолаҡ булайыҡ



**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәпләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

**Гүзәл СИТДИҠОВА, яҙыусы, йәмәғәт эшмәкәре:** Бөгөн туған тел проблемаһы ҡатмарлаша барған осорҙа балаларҙы, йәштәрҙе үҙ теленә ылыҡтырыу юлдарының береһе - интернет. Ул туған телгә ҡыҙыҡһыныу ҙа уята ала, аралашыу мөмкинлеген дә бирә, психологик ярҙам, рухи аҙыҡ булып та хеҙмәт итә. Йәштәрҙе башҡортса әңгәмәләштереү өсөн туған телдә төрлө тематик сайттар, төркөмдәр асырға була. "Контактта" сайтында "Балалар өсөн башҡортса әҫәрҙәр" тигән төркөм алып барам. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, унда балалар әле әҙ инә. Күберәк уҡытыусылар, ата-әсәләр ҡүҙәтеп бара. Балалар, үҫмерҙәр күңелен йәлеп итерлек бит-тәр-төркөмдәрҙе арттырырға кәрәк. Ундағы аралашыу саф башҡортса булмауы, яҙмаларҙа хаталар ебәрелеүе лә ихтимал, әммә бала, текст эсендә бер нисә башҡорт һүҙе булһа ла, телде аңларға тырыша, хәтерендә ҡалдыра бит. Әлбиттә, ебәрелгән хаталарҙы төҙәтеп ебәрергә, һүҙҙәр ҡулланылышы буйынса кәңәш тә бирергә кәрәк. Бына шуға ла интернет селтәрендә телде яҡшы белгән өлкәнерәк быуындың әүҙем булыуы үтә лә мөһим.

Сайттарҙа әүҙем йәштәребеҙ тарафынан асылған башҡорт төркөмдәренең көндән-көн күбәйә барыуы ҡыуаныслы. Унда йәш быуын туған телендә аралашыу менән бергә, бер-береһен рухи яҡтан да тәрбиәләй. Бигерәк тә тиңдәштәренең ғәмен уятырлыҡ патриотик төркөмдәрҙең асылыуы һөйөндөрә. Улар кемдәндер күрһәтмәһе буйынса түгел, ә йәш быуындың күңел ҡушыуы буйынса барлыҡҡа килә. Тик был күренештең бер кире яғын да күҙәтәм. Һәр йәш кеше үҙенен ижад емеше менән уртаҡлаша башлаған хәлдә зауыҡтың боҙолоп китеүе лә ихтимал. Мәҫәлән, кимәле түбән булған шиғри әҫәрҙәрҙең йыш ҡуйылыуын күҙәтергә тура килә. Уның ҡарауы, теҙмә юлдарҙы авторҙар матур сағыу һүрәттәр менән биҙәй. Уҡыусы тиңдәштәре тексына түгел, ә шул һүрәткә ҡарап "лайк"тар ҡуя. Ә был осраҡта йәш кешенең үҙбаһаһы саманан тыш артып китеү хәүефе бар. Шуға ла интернетта оло быуындың күҙе бик тә кәрәк, ололарҙы мин ысын тормошта ғына түгел, виртуаль донъяла ла йәштәргә кәңәшсе, тәжрибә уртаҡлашыусы, ярҙамсы булырға саҡырам.

**Мөнир ИҠСАНОВ**
**яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ТОРМОШТОҢ...

## ыңғай яғын күр

■ Ноттингем университеты (Бөйөк Британия) тикшеренеүселәре ипотека менән кредиттарҙың кешенең эмоциональ торошона насар тәьҫир итеүен белдергән. Улар ун меңгә яҡын Британия халҡының 1991 һәм 2008 йылдар араһындағы матди һәм эмоциональ торошо тураһындағы мәғлүмәттәрҙе анализлап ҡараған һәм ошондай һығымтаға килгән. Һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусыларҙың барыһынан да аҡса, шулай уҡ йоҡоһоҙлоҡ, үҙ-үҙеңә булған ышаныс һәм иғтибарҙы туплау һәләте тураһында һорағандар. Асыҡланыуынса, кем кредит йөкләмәһен ауырлыҡ менән үтәгән, уларҙа өмөтһөҙлөк, хәүеф, үҙен бер нәмәгә һәләтһеҙ тойоу көсәйгән һәм был кешеләр йоҡоһоҙлоҡ менән яфаланған. Үҙ ваҡытында иғәнә индерә алмаған һәр бишенсе кеше депрессия кисергән. Был иң тәү сиратта ипотека алыусыларҙа асыҡ сағылған - оҙайлы ваҡытҡа алынған аҡсалата бурыс уларҙың психикаһына насар тәьҫир иткән.

■ Үҙенең ауырлығын контролдә тота башларға теләгән кеше нимә ашауына иғтибар итә. Әммә сәләмәтлеккә файҙалы ризыҡтар менән генә туҡланыу артыҡ килограмдарҙан ҡотолоуға ышаныс бирмәй, ти Иерусалимдағы иудей университеты белгестәре. Бында мөһим ролде туҡланыу режимы уйнай, тип белдерә улар. Быны ғалимдар сысҡандарҙа үткәрелгән һынауҙар аша раҫлаған. 18 аҙнаға һуҙылған тәжрибәләрҙә сысҡандарға бер үк калориялы ризыҡ биргәндәр. Беренсе төркөмдәң яртыһы майлы аҙыҡты режим менән, икенсе яртыһы теләһә ҡайһы саҡта ашаған. Икенсе төркөмдә лә ошондай уҡ тәртип күҙәтелгән, әммә улар файҙалы ризыҡтар менән туҡланған. Тәжрибә тамамланғансы, бар сысҡандар ҙа һимергән, әлбиттә, тик төрлө ваҡытта туҡланыусылар артыҡ ауырлығы менән айырылыу айырылып торған. Ә бына ҡәтғи режим менән ашаусы сысҡандарҙың ауырлығы артыҡ үҙгәрмәгән. Иң ҡыҙығы, режим менән майлы ризыҡ ашаусылар төрлө саҡта файҙалы ризыҡ ашаусыларға ҡарағанда ябығыраҡ булып сыҡҡан. Шуға ла диетала ултырыусыларға табиптар ризыҡтың калорияһы тураһында ғына түгел, ә туҡланыуҙың режимы хаҡында ла уйланырға саҡыра.

■ Аҙна буйы йоҡо туймай йөрөгәндән һуң күптәр ял көндәрендә оҙағыраҡ йоҡларға тырыша. Әммә Американың Техас университеты ғалимдары был ғәҙәттең беҙгә көс өҫтәмәүен белдерә. Тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе доктор Грегори Картер аңлатыуынса, әгәр ҙә ял көнө бер сәғәткә генә булһа ла оҙағыраҡ йоҡлаһаң, көн менән төндөң алышыныуы менән бәйле биологик процестар боҙола һәм аҙна башланыуына улар ике сәғәткә артҡа шылыуы бар. Әлбиттә, аҙна аҙағына был процестар кире урынына ултырасаҡ, әммә ял көндәрендә кире боҙоласаҡ. Ә был организм өсөн артыҡ стресс. Көн һайын иртәрәк йоҡларға ятып, һигеҙ сәғәт йоҡлауҙан да яҡшыраҡы юҡ, тип кәңәш итә белгестәр.

■ Ғалимдар раҫлауынса, һәр кем 100 йәшкә тиклем йәшәй ала. Американың Джорджия штаты университетында ғүмерҙе оҙайтыусыларын өйрәнеү буйынса ғилми эш алып барыла. Ғалимдар 2001-2009 йылдар арауығында 100 йәш һәм унан да олораҡ 240 кешене тикшереп, ғүмер оҙайлығына тәьҫир итеүсе психологик һәм социаль факторҙарҙы асыҡлаған. Геронтология институты директоры һәм тикшеренеүҙәр авторы Леонард Пун белдереүенсә, оҙаҡ йәшәргә теләүселәр тормошто тик ыңғай яҡтан ҡабул итергә тырышырға тейеш. Был оҙағыраҡ йәшәүҙең иң мөһим сараһы.

ӘСТӘҒӘФИРУЛЛА!

# КҮҘГӘ КҮРЕНМӘҪ ХӘҮЕФ...

## һәр кемдең өйөндә



**Бөгөн көнкүрешендә электр приборҙары ҡулланмаған кешене, ғаиләне табыуы ауырҙыр. Һәр бер йортта һыуытҡыс, телевизор (һәм берәү генә лә түгел), компьютер, кер йыуыу машинаһы , СВП-мейес, плитә, тиҫтәләгән ут яҡтыртҡыс, кеҫә һәм стационар телефондары, уларҙан ҡала фен, тостер, миксер кеүек ваҡ-төйәк…Бынан егерме йыл элек кенә әле уларҙың күбеһе юҡ ине. Әлеге ваҡытта беҙ уларға шул тиклем өйрәндек ки, тормошобоҙҙо уларһыҙ күҙ алдына килтереп тә булмай. Өҫтәүенә, беҙ уларҙың зыяны хаҡында уйлап-нитеп тә тормай, һис бер ҡурҡыуһыҙ тотонабыҙ. Ә шул уҡ ваҡытта һәр беребеҙҙе үҙ өйөбөҙҙә ҙур хәүеф һағалауын беләбеҙме? Бөгөн медицина өлкәһендә тикшеренеүсе ғалимдар аллергияның электр магнитлы нурланыу тәьҫирендә барлыҡҡа килеүсе яңы төрөн асыҡланы. Юғары категориялы табип-аллерголог Нәсимә Нәүширйән ҡыҙы ВӘЛИЕВАнан ошо күренешкә аңлатма биреүен, уны иҫкәртеү һәм һаҡланыу саралары хаҡында һөйләүен һорап мөрәжәғәт иттек.**

➔ **Нәсимә Нәүширйән ҡыҙы, ғаиләлә беҙ, ғәҙәттә, балаларҙы телевизор менән компьютер янында оҙаҡ ултырмаҫҡа тип тыя килһәк тә, уларҙың кеше организмына тәьҫире һәм ошо тәьҫирҙең эҙемтәләре хаҡында анығ ҡына итеп аңлата белмәйбеҙ шикелле. Белгес булараҡ, бәлки, һеҙҙең һүҙегеҙ үтемлерәк яңғырар?**

- Һорауығыҙҙа дөрөҫлөк бар, ысынлап та, ҡоро тыйыуҙы тора-бара ҡолаҡ ишетмәй ҙә башлай бит, шуға күрә, кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәр менән нигеҙләгәндә генә ул һөҙөмтә бирә. Икенсенән, электр магнитлы мөхит күҙгә күренмәгәс, уның хәүеф-хәтәре лә аңға барып етмәй, күрәһең. Һуңғы ваҡыт ғалимдар электр магнитлы нурланыу сығанаҡтарын ентекләп тикшергәндән һуң шундай һығымтаға килде: заманса электр приборҙары кеше организмында нурланыуға яңы төр аллергия барлыҡҡа килтерә. Әйләнә-тирәбеҙҙә электр магнитлы нурланыу ни тиклем күберәк булған һайын, иммунитет өсөн был шул тиклем зарарлыраҡ. Беҙҙең иммун системаһы тышҡы мөхитебеҙҙә һәр саҡ йәшәп килгән факторҙар тәьҫирен ҡайтарыуға ҡоролған һәм күнеккән булһа, аллергендарҙың һалма сығанаҡтары тәьҫире бөтөнләй башҡаса. Уларҙың емерткес тәьҫире менән иммунитет көрәшә алмай. Билдәһеҙ төрҙәге сир башлана, уны дауалау һөҙөмтә бирмәй. Яңы төрҙәге аллергендың барлыҡҡа килеүе уның тәбиғәтен ныҡлап өйрәнеүҙе һәм ғәмәлдәге санитар нормаларҙы ҡайтанан ҡарап сығыуҙы талап итә. Әлегерәк электр магнитлы нурланыуҙың иң хәүефле төрө тип телевизор иҫәпләнә ине. Уны ҡарағанда экранға ике метрҙан да яҡыныраҡ ултырырға ярамауын бөтәбеҙ ҙә белә. Медицина практикаһында карауаты телевизор янында урынлашҡан бер нисә баланың баш мейеһе шеше менән сирләй башлауы мәғлүм. Әлбиттә, ваҡыт үтеү менән технологик нормативтарға талап көсәйҙе, шунлыҡтан, әлеге телевизорҙар элеккеләренән күпкә хәүефһеҙерәк, ләкин уны, күнегелгәнсә, алыҫтанараҡ ҡарау хәйерле.

➔ **Компьютерҙар тураһында ла әйтеп китһәгеҙ ине...**

- Компьютерҙарҙың тәүге быуыны, монитор һәм системалы блок иһәнда нурланыу кимәле көслө булғанлыҡтан, медиктарҙа шулай уҡ хәүефләнеү тыуҙыра ине. Был йәһәттән дә ҡәтғи санитар нормалар булдырылды, улар компьютерҙар урынлашҡан бинаға (бүлмәгә) һәм унда эшләү ваҡытына ҡағыла. Ә инде ауырлы ҡатындарға ғөмүмән компьютерҙа ултырмаҫҡа ҡушылһа, балаларға, йәшенә ҡарап, 20 -30 минутҡа тиклем сикләүҙәр индерелгән. Хәҙер иһә ғалимдар иғтибары файҙаланыусының тәненә яҡыныраҡ булған ноутбуктарға күсте, әммә был юҫыҡта һүҙ электр магнитлы нурланыу түгел, ә уларҙың йылытҡыс тәьҫире хаҡында бара, сөнки файҙаланыусыларҙың күбеһе ноутбукты теҙҙәренә һалып эшләй, ә был, үҙ сиратында, гениталийҙар өлкәһендә зыянлы йылылыҡ эффекты барлыҡҡа килтерә. Һөҙөмтәлә организм түлһеҙлек сиренә дусар булыуы ихтимал.

➔ **Ниһәйәт, кеҫә телефондарына ла өйрәндек, улар көнө буйы беҙҙең кеҫәлә, төнөн - мендәр аҫтында. Уларҙың зыяны тураһында ла ишетеп беләбеҙ, ләкин уға төкөрөп бирәбеҙ...**

- Мобиль элемтә хәлде тамырынан үҙгәртте. Цивилизация тарихында тәүге тапҡыр һәр ҡайҙа һәм һәр кемдең хроник нурланыуына юл асылды. Улар арҡаһында тере йөрәк диапазонында эшләүсе кардиостимуляторҙарҙың эше боҙолған осраҡтар булды. Донъя кимәлендә телефондарҙың зыянын иҫбатлаусы тәжрибәләр байтаҡ үткәрелә. Мәҫәлән, тәлмәрйендең алынған йөрәге фиҙиретмәлә ике тәүлек буйы һуғып, эшләп ята. Уларға электр магнитлы тулҡындар менән тәьҫир итеүсе тәжрибәнән һуң 90 процент осраҡта йөрәктәр шунда уҡ тибеүҙән туҡтай. Швед ғалимдары иһә шундай тәжрибә үткәргән. 50 тәүлек буйына ҡомаҡтарҙың мейеһен икешәр сәғәт нурландырыу һөҙөмтәһендә уларҙың нервы күҙәнәктәре боҙола башлай һәм мейене зарарланыуҙан һаҡлаусы тәбиғи механизмда кире үҙгәрештәр барлыҡҡа килә. Украина ғалимдары шулай уҡ 20 тәүлек буйы нурланыуға дусар ителгән ҡомаҡтарҙың ҡанын алып, уны сәләмәт ҡомаҡтарға ебәреү һөҙөмтәһендә һуңғыларында аутоаллергия билдәләре барлыҡҡа килә: уларҙың ауыры төшә йә булмаһа үлә тыуа. Рәсәй тикшеренеүселәре лә нурландырылған ҡомаҡтарҙың мейе тукымаһы менән шундай уҡ һөҙөмтәләр ала. Шул уҡ ваҡытта кеҫә телефондарын зыянһыҙ тип күрһәтергә маташыусылар ҙа бар, ундай "тикшеренеүҙәрҙе", ҡағыҙа булараҡ, телефондар етештереүсе эре компаниялар финанслай. Бындай хәлдә телефондарҙы ҡулланыуҙа ҡәтғи нормативтар һәм сикләүсе саралар булдырыу ғына бер аҙ ыңғай һөҙөмтә бирәләр, тип уйлайым. Ҡайһы бер илдәрҙә, мәҫәлән, Францияла организмға зыяны тулыһынса асыҡланғанға тиклем балаларға мәктәпкә телефон алып килеү рөхсәт ителмәй; Бөйөк Британияла махсус балалар өсөн тәғәйенләп етештерелгән телефондарҙы һатыу тыйылған. Японияла кеше иң күп йөрөгән транспорт төрө - поездарҙа телефондан һөйләшеү шулай уҡ тыйылған, сөнки был ваҡыт эргәлә ултырып килгән пассажирҙарға ла зыянлы тәьҫир көсө тарала.

➔ **Күренеүенсә, ғалимдар был йәһәттән берҙәм фекергә килмәгән әле, ә шулай ҙа мәсьәлә былай ҙа аңлашылып тора: һаҡланғанды - һаҡлармын, ти, тик бына нисек һаҡланырға һуң?**

● Иң беренсе кәңәшем шул: йортоғоҙҙа, айырыуса йоҡо һәм балалар бүлмәләрендә, электр приборҙарын мөмкин тиклем кәметегеҙ.

● Балаларға телевизорҙы яҡын ултырып ҡарарға һәм, ғөмүмән, уның тирәһендә уйнарға рөхсәт итмәгеҙ.

● Йәш үҫенсәлектәренә ҡарап, компьютерҙа шөғөлләнеү ваҡытын сикләгеҙ.

● Ауырлы ҡатындарға компьютерҙа ултырыуҙан һәм кеҫә телефонынан оҙаҡ итеп һөйләшеүҙән тыйылырға кәңәш итәлә.

● Кеҫә телефонығыҙҙы үҙегеҙҙән мөмкин тиклем йыраҡыраҡ тотоуға һәм гарнитура менән файҙаланырға тырышығыҙ. Йоҡонан уятыу сигналын ҡуйһағыҙ, уны карауатығыҙға, баш осона һалып ятмағыҙ. Телефонығыҙҙы баулап, муйынға аҫып та йөрөтмәгеҙ. Иң яҡшыһы - уны салбарҙың артҡы кеҫәһендә йә тағы ла хәүефһеҙерәк урын - сумкағыҙҙа йөрөтөгөҙ.

● Машинала барғанда телефондан мөмкин тиклем аҙыраҡ һөйләшегеҙ, сөнки трубкаға килгән сигнал салондың металл корпусына сағылып, икеләтә нурланыу хасил итә.

● Ғәҙәттә, беҙ телефонды фәҡәт бер яҡ ҡолаҡҡа ҡуйып һөйләшәбеҙ. Был баш мейеһенең дә фәҡәт бер яҡ яртыһының һәм бер яҡ ишетеү нервыһының нурланыуына килтерә. Мөмкин булғанда, трубканы икенсе яҡҡа ла тотоорға онотмағыҙ.

● Бәләкәй балалар өсөн кеҫә телефоны айырыуса зыянлы. Ләкин хәҙер уны ҡулланыуҙы тыйып та булмай, сөнки ул кәрәк. Шуға ла уны бик кәрәк саҡта ғына файҙаланырға өйрәтегеҙ, уның уйынсыҡ түгеллеген яҡшылап аңлатығыҙ. Класс етәкселәренән балаларҙың телефондарын алып, шкафта бикләп тотоуын һорарға ла була.

● Өйҙәге үткәргесһеҙ телефондар ҙа бик зыянлы, уларҙың нурланыу кимәле көслө генә, шуға күрә өйҙә элekке шнурлы телефондарҙы файҙаланыу хәйерлерәк.

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.

*ҺАБАҠТАР*

# ТЕЛӘГӘНЕН...

## кеше үҙе яулай

**Бер кеше урам буйлап үтеп барғанда тоҡсай тотоп торған ҡартты һәм уны уратып алған балаларҙы күреп ҡала. Ҡарт балаларҙың һәр теләген үтәй икән.**

"Мин уйынсыҡ машина теләйем", - ти бер малай. Һәм ҡарт тоҡсайҙан уйынсыҡ машина алып бирә. "Ә миңә яңы күлдәк кәрәк", ти ҡыҙыҡай. Ҡарттың тоҡсайынан өр-яңы күлдәк килеп сыға. "Был бит тылсымсы", тип уйлай ҡыҙыҡып торған кеше. Һәм балаларҙың таралышҡанын көтөп ала ла, ҡартты тотоп алып, уны тоҡсайына ултыртып, күтәреп өйөнә алып ҡайта. Ҡайтҡас, тоҡсайҙы сисеп: "Хәҙер, ҡартлас, һин минең теләктәрҙе генә үтәйәсәкһең", - ти был кеше.

- Ярар, - ти ҡарт, - әйт теләгеңде.

- Донъялағы иң шәп машинала йөрөргөм килә.

Ҡарт тоҡсайынан машинаның асҡысын сығарып бирә. Шунан был кеше ҡартты өйөнә бикләй ҙә, яңы машинала елдерергә сығып китә. Бер аҙнанан ҡайтып, ҡартты әрләргә тотона:

- Һин мине алдағанһың. Минеке кеүек ҙур һәм матур машиналар урам тулы. Минә бер кем дә иғтибар итмәй.

- Ни кәрәк һуң һиңә?

- Миңә күп аҡса кәрәк.

Ҡарт тоҡсайынан чек сығарып бирә. Теге кеше ҡарттын бикләп, йәнә сығып китә. Аҙна үткәс, тағы асыуланып ҡайта:

- Һин мине алдағанһың. Мин баҙарҙа йөрөп, йәнем теләгәнде һатып алдым. Ләкин башҡа кешеләр ҙә шул уҡ әйберҙәрҙе һатып алды.

- Тағы ни теләйһең?

- Донъялағы иң матур ҡатын-ҡыҙ минеке булһын, - ти кеше. "Ярай, теләгең үтәлер", - ти ҡарт. Был кеше ҡартты бикләп, тағы ла сығып китә. Бер аҙнанан һуң ҡайтып, йәнә ҡәнәғәтһеҙлеген белдерә:

- Иң гүзәл ҡатын-ҡыҙ өсөн барыһын да эшләргә әҙер булдым. Ә уға аҡсам ғына кәрәк булған икән.

- Һин өс теләк әйттең, ләкин теләгәндәреңде һораманың, - ти ҡарт.

- Нисек инде улай?

- Һин машина һораның, ә ысынында хөрмәт теләнең; аҡса һораның, тик үҙаллылыҡ теләнең; ҡатын-ҡыҙ һораның, ләкин мөхәббәт теләнең. Хөрмәт, үҙаллылыҡ һәм мөхәббәтте мин һиңә бирә алмайым. Уларҙы кешеләр үҙҙәре яулап ала. Хәҙер мин китәм.

- Мин һине ебәрмәйем, - ти кеше.

- Мин теләгән ваҡытта китә ала инем.

- Ни өсөн китмәй, теләктәремде үтәнең һуң?

- Бер ай ял итеп алырға теләгәйнем, ялым бөттө, - ти ҙә ҡарт, тоҡсайына инеп юҡ була.

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

## Махатма Ганди рухы

Беҙҙең төбәк өсөн ябай булмаған әлеге аҙымға мине бөйөк Гандиҙың рухы әҙерләне. 1985 йылда Горевтың "Махатма Ганди" тигән бик аҡыллы китабын уҡыным. Революцияны тыныс юл менән дә эшләп булғанын тәү тапҡыр ошо китаптан белдем дә инде. Һиндостанды азат итеүҙең һуғышһыҙ юлы күнелемдең күҙгә күренмәгән сындарына ҡағылғандай булды. Гандиҙың китабын табып уҡыу теләге барлыҡҡа килде. Ун өс йәшемдә тәүге көндәлегемде башлағайным. Унда бары тик ике генә яҙыу булғанын иҫләйем: ниндәйҙер авторҙың инглиз теле дәреслеге һәм Махатма Гандиҙың "Минең тормошом" яҙмалары. Ул ваҡытта мин Ганди тураһында бер ни ҙә белмәһәм дә, үҙе өҫтөндә эшләргә хыялланыусылар мотлаҡ рәүештә ошо тормош китабын уҡып сығырға тейеш, тигәнде бер китаптә күреп ҡалғайным. Егерме ике йыл үткәс кенә Гандиҙың ысын мәғәнәһендә кем булыуын, физик яҡтан көслө булмағандың бөйөк көсө нимәлә икәнен белдем. Бына шул саҡта был китапты табырға, уҡырға тигән маҡсат ҡуйҙым.

Беҙ ул йылдарҙа Сибайҙа йәшәй инек, Гандиҙың тормош китабын унда табып булманы. Шуға ла мин уны партияның ҡала комитетында китапхана-ара абонемент буйынса һораттым да... онноттом. Ай аҙағында мине айлыҡ курстарға икенсе ҡалаға ебәрҙеләр. Өйгә кире ҡайтҡас, өҫтәлемдә һоро тышлы ҡалын бер китапҡа тап булдым. Мохандас Карамчанд Гандиҙың "Минең тормошом" китабы ине был. Уны өс көн эсендә уҡып бөтөргә кәрәк икән - китапхана-ара абонементтың шарты шулай булған. Ете көн курстарҙа үткән дә киткән, шуға ла бирелгән ун көндән бер ни ҙә ҡалмаған, тиерлек. Бөхетем бар икән: өс көн яңы йыл байрамдарына тура килгәнлектән, китапты уҡып ҡына түгел, яҙмалар ҙа эшләргә өлгөрҙөм.

Ул ваҡытта миңә 36 йәш ине. Гандиҙың ахимс - йән эйәләренә насарлыҡ ҡылмау тураһындағы идеяларына әллә ни иҫем китмәгәйне. Балыҡ тотоуҙы, унын өсөн селәүсен ҡармаҡлауҙы дауам иттем. Көн һайын ашханала төшкө ашҡа бер тәрилкә ит һурпаһы эсеп, икенсегә гел генә тиерлек йомортҡалы бифштекс һорай торғайным.

Шулай ҙа китапты уҡыу бушҡа булманы. Махатма Гандиҙың ижады, тормош юлы менән танышыуым һәҙәмтәһе шул булды: мин һул ҡул менән яҙа башланым. Көнөнә ярты сәғәтләп яҙышып, яйлап өйрәндем. Ҡайны берҙә маҡсаттарым тураһында онотһам да, аңым тулыһынса Ганди рухы менән йәшәй ине. Көтмәгәндә һул ҡулым ручканы үҙе алып, кәкре таяҡтар менән быға тиклем миңә таныш булмаған уй-фекерҙәрҙе яҙа башланы.

### Медицинанан төңөләү

Бәләкәй сағымдан әсәйем: "Балам, аяғынды һаҡла, барлыҡ ауырыуҙар аяҡ аша керә", - тип иҫкәртә торғайны. Тәжрибә булмағанлыҡтан, әсәйемде тыңламайынса, күберәк өҫкә ағымды кейендерә торғайным. Әсәйемдең тулыһынса хаҡлы булыуын 1990 йылдың апрелендә генә аңланым. Беҙ, "Совет Башҡортостаны" гәзите коллективы, Матбуғат йорто эргәһендәге бәләкәй майҙансыҡты таҙартабыҙ. Көн ныуыҡ, аяҡ аҫты дым. Мин кәрәк менән эш итәм, шуға ла кәүҙәмдең өҫкө яғы һыуыҡты һиҙмәй. Аяғым нык өшөй. Аяҡ кейемем йәйге, йоҡаҡ ҡына. Һыуыҡтың йылап ҡына, ләкин тырышып-тырышып тәнемә үткәнен һиҙә башланым.

Кис көнө, өйгә ҡайтҡас, температурм күтәрелеп китте. Иртәгәһенә ҡартлыҡ ауырыуы - хроник бронхит башланды. Поликлиникаға киттем. Сирҙең сәбәбе хаҡында уйланманым да, табиптарҙың барлыҡ сирҙәрҙе дауалау һәләтенә ышана инем. Дарыу, дауаланыу процедуралары, уколдарға ҡарашым ыңғай ҙа һымаҡ. Сәләмәт кеше өйҙә йәшәп, ошо дарыуҙарҙы һатып алдым. Ауырыуым өс көндән бөтәсәген белә инем. Ләкин, көтмәгәндә, икенсеуән булды ла ҡуйҙы: дарыу ярҙам итмәй, ауырыуым ҡотороп та китмәне, бөтмәгән дә кеүек. Тағы ла поликлиникаға юл тоттом. Хәҙер инде табип олететрин урынына көслөрәк антибиотик яҙып бирҙе. Яңы дарыу эсә башлау менән үҙемде ике төрлө тойҙом: бронхит быгауҙарын систем, әммә хәҙер инде ашҡаҙаным ныҡлап ауырта башланы. Был хәл мине уйға һалды: тағы ла поликлиникаға ашҡаҙанымды дауалатыр өсөн барһам, нимә, хәҙер башҡа ағзаларыма ла зыян килерме?

Утыҙ туғыҙ йәшемә тиклем хроник бронхит сиренә шул саҡлым күнгәнмен. Хатта үҙем-үҙемә диагноз ҡуйып, уны дауалау юлын билдәләнем. Рецепт ябай ине: көнөнә бер аспирин һәм өс олететрин таблетҡаһы. Участка табибы ла шул уҡ рецепт буйынса дауаланырға ҡушты. Аптекаға инеп, ошо дарыуҙарҙы һатып алдым. Ауырыуым өс көндән бөтәсәген белә инем. Ләкин, көтмәгәндә, икенселәй булды ла ҡуйҙы: дарыу ярҙам итмәй, ауырыуым ҡотороп та китмәне, бөтмәгән дә кеүек.

Әммә бының менән эш бөтмәне әле. Тиҙҙән бер сәбәпһеҙ йотоу ғәмәлен башҡарыу ғәҙәте барлыҡҡа килде. Аш һеңдереү юлында гел ҡоролоҡ һиҙҙем. Был әле генә әләктергән сир ине, ахры. Дөрөҫөрәге, республика гәзитендә дүрт йыл эшләүемдең әҙемтәһе шул булды: сәләмәтлегем ҡаҡшаны. Ваҡыт еткерә алмау, нервылар көсөргәнешлеге, райондарҙа ышанысылы һәм эшлекле хәбәрселәр селтәре булмауы минең рухи көсөмдө тамам ҡаҡшатты. Был хәл барлыҡ киң мәғлүмәт сараларында эшләүселәргә лә хастыр, моғайын. Ҡәләм һәм микрофон менән эш итеүселәр, ғәҙәттә, үҙҙәренең стресс һәм арыуын спиртлы эсемлектәр һәм тәмәке кеүек ысулдар менән бөтөрә. Ләкин был юл минең өсөн ҡулай түгел ине. Мин ҡарар ҡабул итергә тейеш инем: эштән китергәме, әллә эштә ҡалып, үҙемде тамам үлем хәленә еткерергәме? Мин беренсе юлды һайланым: башҡа бер ҡасан да журналистика менән шөғөлләнмәйәсәкмен, тип үҙемә һүҙ биреп, эштән киттем.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Характер тәрбиәләү

**"Барыһы ла сүп үләндәренең баҡсаны сүпләүен һәм баҫыуҙарҙың уңдырышлылығын кәметеүен белә. Баҡсасы ла, фермер ҙа даими рәүештә сүпте утап торорға тейеш… Был ҡараш шәхси характерыңды булдырыуға һәм уны нығытыуға ла ҡағыла. Берәү ҙә беҙҙең проблемаларыбыҙҙы һәм ауырлыҡтарыбыҙҙы үҙебеҙҙән башҡа яҡшы белмәй, шуға күрә һәр ҡайныбыҙға, "баҫыуыбыҙ" тере һәм уңдырышлы булһын өсөн, характерыбыҙҙы утап торорға кәрәк", тигән Джордж Мэттью Адамс.**

Хәл-торошто үҙгәртеүгә өмөтләнер алдынан, тәү сиратта, үҙегеҙҙе үҙгәртегеҙ. Әгәр компания менән етәкселек итергә теләһәгеҙ, тәүҙә үҙегеҙ менән идара итергә өйрәнегеҙ. Әгәр ғаилә башлығы йәки бригада етәксеһе булырға теләһәгеҙ, башта үҙегеҙгә баш булығыҙ. Камиллыҡ - тормош уңышының нигеҙе. Уның башы, һәр ваҡыттағыса, һеҙҙең нисек фекерләүегеҙҙә ята. Һеҙҙең фекерләү образығыҙ - характер ул. Әгәр фекерләүегеҙ асыҡ, аныҡ түгел икән, тимәк, характерығыҙ көсһөҙ. Ныҡлы дисциплиналы фекерләүсе булығыҙ һәм һеҙ бөтөн, бик көслө, маҡсатҡа ынтылышҡа, ҡаһарманлыҡҡа, ышанысҡа бай, тормош уңышының нигеҙен тәшкил иткән характерға эйә булырһығыҙ.

**Әүҙемлектән алынған ҡәнәғәтлек**

Тормошта әүҙем булыу - үткәндәрҙәге уңышһыҙлыҡтарҙың, ғаилә тарихында йәки уңышһыҙ хәл-торошта ҡаҙаныштарығыҙ булмауҙың сәбәптәрен эҙләмәү ул. Тимәк, был һеҙҙең түгелгән һөт өсөн дә башҡаса күҙ йәше сығармаясағығыҙҙы, тормоштоң һеҙҙең менән аяуһыҙ булыуына зарланмауығыҙҙы аңлата. Һеҙ тормошта әүен: иғтибарығыҙҙы бары тик эшмәкәрлеккә йүнәлткәнһегеҙ. Был тормошта уңыш ҡаҙанған кешеләрҙең барыһы ла әүҙем. Улар уңышһыҙлыҡты һәм еңелеүҙе - һабаҡ, ә хаталарҙы үҫеү өсөн яҡшы мөмкинлек тип ҡараған. Улар ауырыныу - иң яҡшы уҡытыусы, ә тормошта кире ваҡиғалар юҡ, бары тик һабаҡтар һәм һығымталар ғына бар, уларҙы, теләк булғанда, үҫеү өсөн трамплин итеп файҙаланырға мөмкин икәнлекте аңлаған. Рауза сәскәһенең ҡыуағын һабағында аҙ ғына сәнскәктәре булған сәскә ҡыуағы тип ҡарарға ла була, уны уҡ өҫкө өлөшөндә бәләкәй генә сәскәләре булған сәнскеле ҡыуаҡ тип тә ҡарарға мөмкин. Тикшереү объекты бер үк, әммә аңлатма һәм ҡабул итеү - ҡапма-ҡаршы. Үҙегеҙҙә һөҙөмтәле уйлау ғәҙәтен нығытҡас, алдығыҙҙа яңы донъя асылыр.

Әүҙем булыу - тимәк, хәл-ваҡиғаларға һинең үҙ ағышына алырға мөмкинлек бирмәй, уларҙы үҙеңсә бороу ул. Һеҙҙең үткәндәрҙә булған йәки киләсәктә көтәсәк ваҡиғаларҙы үҙегеҙ теләгәнсә тәфсирләп, үҙегеҙ теләгәнсә бороп ебәреү мөмкинлегегеҙ бар. Мәсәлән, кемдер һеҙҙе кәмһетергә теләй икән, һеҙ был ваҡиғаны үҙегеҙсә бора алаһығыҙ. Ябай, ғәҙәти кеше булһағыҙ - асыуланасаҡһығыҙ, даими рәүештә үҙ-үҙегеҙгә ошо һорауҙы бирәсәкһегеҙ һәм кире энергияны йыясаҡһығыҙ, ә инде әүҙем булһағыҙ, теләһә ниндәй ваҡиғаны ыңғай яҡҡа бороп, унан яңы энергия аласаҡһығыҙ. Элеонора Рузвелт әйткәнсә: "Үҙегеҙ риза булмаһағыҙ, берәү ҙә һеҙҙе ҡыйырһыта алмай".

**Робин ШАРМА.**



## 24 СЕНТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Женский журнал"
09.50 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Сердце Марии", 54-я серия (16+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Пока все дома" (12+)
15.50 "Фурцева", 5-я серия (12+)
16.55 "Кривые зеркала"
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Единственный мой грех", 5-я серия (16+)
22.30 "Вечерний Ургант" (16+)
23.00 "Опережая выстрел", 5-я серия (12+)
00.00 Ночные новости
00.20 "Без свидетелей". Сериал (16+)
00.50 "Пропавший без вести" (16+)
01.40, 03.05 "Кокон: Возвращение"
03.00 Новости
04.00 "Детройт 1-8-7) (16+)

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести - Башкортостан"
09.00 "1000 мелочей"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Люблю, не могу!" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь". Сериал
15.45 "Кровинушка". Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести - Башкортостан"
17.50 "Судьбы загадочное завтра", 1-я и 2-я серии. Драматический сериал (12+)
19.40 "Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Склифосовский", 1-3-я серии. Сериал (12+)
00.20 "Девчата" (16+)
01.00 "Вести+"
01.20 "Ложь и иллюзии". Боевик (16+)
03.10 "Шизо". Триллер

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.35 "Возвращение Мухтара-2". Детективный сериал (16+)
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Живут же люди!"
10.55 "До суда" (16+)
12.00 "Суд присяжных" (16+)
13.25 "Морские дьяволы". Сериал (16+)
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка" (16+)
17.40 "Говорим и показываем" (16+)
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Улицы разбитых фонарей-12". Криминальный сериал (16+)
21.25 "Карпов". Криминальный сериал (16+)
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Дикий". Криминальный сериал (16+)
01.35 "Центр помощи "Анастасия" (16+)
02.20 "В зоне особого риска" (18+)
03.00 "Холм одного дерева". Сериал
04.55 "Час Волкова". Детективный сериал (16+)

### БСТ
**07.00 "Салям" (12+)**
**10.00 "Новости недели" (на башк. яз.) (16+)**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+)**
**10.45 "Городок АЮЯ" (0+)**
**11.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15 "Орнамент" (0+)**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.) (16+)**
**11.45 "Новости недели" (на русск. яз.) (16+)**
**12.15, 17.45 "Полезные новости" (12+)**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.) (16+)**
**12.45 "Автограф" (0+)**
**13.30 "Новости" (на башк. яз.) (12+)**
**13.45 "Мелодии души" (0+)**
**14.45 "В активном поиске" (12+)**
**15.15 "Учим башкирский язык" (0+)**
**15.45 "Зеркальце" (6+)**
